**МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ**
**Министерство образования и науки Республики Башкортостан**
**МР Салаватский район**
**МОБУ СОШ с. Лагерево**

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДЕНО |
| --- | --- | --- |
| на методическом совете | Зам. директора по УВР | Директор школы |
| | ______ Гарипова Р.Р. | ______ Ситдиков З.Р. |
| Протокол № 1 | | Приказ № 1 |
| от " 29 " 08. 2025 г. | " 29 " 08. 2025 г. | от " 29 " 08. 2025 г. |

МОБУ СОШ с. ЛАГЕРЕВО

**Рабочая программа**

**по учебному предмету**

**«Родной (башкирский) язык»**

Садыкова Гульнур Закировна,
учитель башкирского языка и литературы

**С. Лагерево-2025**

**МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ**
**Министерство образования и науки Республики Башкортостан**
**МР Салаватский район**
**МОБУ СОШ с. Лагерево**

| | | |
|---|---|---|
| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДЕНО |
| на методическом совете | Зам. директора по УВР | Директор школы |
| | ______ Гарипова Р.Р. | ________ Ситдиков З.Р. |
| Протокол №1 | | Приказ № 1 |
| от “ 29 ” 08. 2025 г. | “ 29 ” 08. 2025 г. | от “ 29 ” 08. 2025 г. |

**Рабочая программа**

**по учебному предмету**

**«Родной (башкирский) язык»**

Садыкова Гульнур Закировна,
учитель башкирского языка и литературы

**С. Лагерево-2025**

## Аңлатмалы яҙыу

Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған төп дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-9 кластары өсөн программа һәр уҡыу йылында уҡыу предметының йөкмәткеһен, уҡытыуҙың төп методик стратегияһын, «Туған (башҡорт) тел» уҡыу предметы саралары ярҙамында уҡыусыларҙы тәрбиәләү һәм үҫтереүен билдәләй.

Программаның норматив-хоҡуҡи нигеҙләнеше:

- Рәсәй Федерацияһының конституцияһы;
- «Рәсәй Федерацияһының мәғариф тураһындағы законы» (29.12.2012. №273-ФЗ) (үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр менән);
- «Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы (25.10.1991. № 1807-1 ФЗ) (үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр менән);
- «Төп дөйөм белем биреү Федераль дәүләт белем биреү стандарттары» (31. 05.2021 й. № 287);
- Төп дөйөм белем биреүҙең өлгө төп дөйөм белем биреү программаһы (18.03.2022. № 1/22 дөйөм белем биреү буйынса федераль уҡыу-уҡытыу берекмәһе ҡарары менән раҫланған);
- Өлгө тәрбиәүи программа (02.06.2020. № 2/20 дөйөм белем биреү буйынса федераль уҡыу-уҡытыу берекмәһе ҡарары менән раҫланған);
- «Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының туған телдәрен уҡытыу Концепцияһы» (2019 йылдың 1 октябрендә Рәсәй Федерацияһының Мәғариф Министрлығы коллегияһы ултырышында раҫланған);
- Башҡортостан Республикаһының конституцияһы;
- Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһындағы» Законы (үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр менән);
- 2021 – 2030 йылдарҙа «Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен һәм Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының туған телдәрен уҡытыу Концепцияһы» (30 декабрь Башҡортостан Республикаһы Башлығы 2020 йылда № УГ-613 Ҡарары менән раҫланған);
- Уҡытыу туған (башҡорт) телендә алып барылған төп дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-9 кластары өсөн туған (башҡорт) теле уҡыу предметының өлгө эш программаһы (Ғәбитова З.М., 2022 й.).

### «Туған (башҡорт) теле» уҡыу предметын өйрәнеүҙең маҡсаты һәм бурыстары

«Туған (башҡорт) теле» уҡыу предметын өйрәнеүҙең **маҡсаты** – телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәрен, туған телдәге коммуникатив күнекмәләрҙе һәм телмәр мәҙәниәтен камиллаштырыу, башҡорт теленең үҙенсәлектәре, тел тураһындағы фәндең бүлектәре менән тап килеүсе төп тел берәмектәре тураһында белемдәрҙе киңәйтеү.

«Туған (башҡорт) теле» уҡыу предметын өйрәнеүҙең **бурыстары:**

— дөйөм Рәсәй ҡиммәте, сағылдырыу формаһы һәм башҡорт, Башҡортостан Республикаһының башҡа халыҡтарына рухи байлығын һаҡлаусы, кешенең төрлө сфералағы эшмәкәрлегендә аралашыу һәм белем алыу сараһы булараҡ башҡорт теленә ҡарата аңлы мөнәсәбәт тәрбиәләү,

— дөйөм Рәсәй һәм башҡорт мәҙәниәтенә, Рәсәй Федерацияһының барлыҡ халыҡтарҙың мәҙәниәтенә һәм теленә ҡарата ихтирам тәрбиәләү;

— шәхсән үҫеш инструменты һәм төрлө мәғлүмәтте ҡабул итеү, шул иҫәптән төрлө уҡыу предметтарынан белем алыу сараһы булараҡ башҡорт телен үҙләштереү;

— башҡорт теле тураһында белемдәрҙе, уның төҙөлөшө һәм үҫеш ҡанундары, башҡорт теленең стилистик ресурстары тураһында белемдәрҙе үҙләштереү; башҡорт әҙәби теле нормалары һәм телмәр этикеты нормаларын практик үҙләштереү;

— актив һәм потенциаль һүҙлек запасын байытыу һәм төрлө грамматик сараларҙы үҙ телмәр практикаһында ҡулланыу;

— орфографик һәм пунктуацион грамоталыҡты камиллаштырыу; телмәреңде камиллаштырыуға ынтылыуҙы тәрбиәләү;

— телмәр эшмәкәрлеген, шәхес- ара һәм мәҙәниәт- ара формаль һәм формаль булмаған шарттарҙа кешеләр менән эффектив аралашыуҙы тәьмин итеүсе коммуникатив күнекмәләрҙе камиллаштырыу;

— башҡорт телен өйрәнеү процесында фекер йөрөтөү эшмәкәрлеген универсаль интеллектуаль сағыштырыу, анализ, синтез, абстрактлашыу, дөйөмләштереү, классификациялауҙы камиллаштырыу, билдәле законлылыҡ һәм ҡағиҙәне булдырыу;

— функциональ грамоталыҡты үҫтереү: мәғлүмәти эҙләнеү күнекмәләрен тормошҡа ашырыу, кәрәкле мәғлүмәтте алыу һәм эшкәртеү, интерпретация биреү һәм төрлө форматтағы текстарҙы (тотош, тотош булмаған текст һәм б.) аңлау һәм ҡулланыу;

— стратегик һәм тактик мәғлүмәти-мәғәнәүи тексты эшкәртеүҙе, тексты аңлау, уның билдәләнешен, дөйөм мәғәнәһен, авторҙың коммуникатив ниәттәрен, логик структураһын, тел сараларының ролен үҙләштереү.

“Туған (башҡорт) тел” уҡыу предметының уҡыу планындағы урыны

Төп дөйөм белем биреү Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы «Туған (башҡорт) теле» уҡыу предметы «Туған тел һәм туған әҙәбиәт» предмет өлкәһенә ҡарай һәм уҡыу планының мотлаҡ уҡый торған предметтар исемлегенә инә. «Туған (башҡорт) теле» уҡыу предметын өйрәнеүгә төп дөйөм белем биреүҙең бөтә кластарында аҙнаға 2 сәғәт бүленә.

## “Туған (башҡорт) теле” уҡыу предметы программаһының төп йөкмәткеһе

## 5 класс

### Тел тураһында дөйөм төшөнсә

Лингвистика тел тураһында фән. Башҡорт теленең байлығы һәм тасуирлығы

### Тел һәм телмәр

Тел һәм телмәр. Телдән һәм яҙма, монологик һәм диалогик телмәр, полилог. Телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре (һөйләү, тыңлау, уҡыу, яҙыу), уларҙың үҙенсәлектәре.

Тормоштағы күҙәтеүҙәр, фәнни, әҙәби һәм фәнни-популярәҙәбиәт һәм уҡыу нигеҙендә телдән монологик телмәр ҡороу.

Уҡылған йә тыңланған тексты телдән һөйләү.

Лингвистик темаға (өйрәнгәндәр нигеҙендә) һәм тормош күҙәтеүҙәре нигеҙендәге темаларҙағы диалогта ҡатнашыу.

Аудирования төрҙәре: һайлау, танышыу, ентекле. Уҡыу төрҙәре: өйрәнеү, танышыу, ҡарап сығыу, эҙләнеү.

## Телмәр мәҙәниәте

Милли телдәрҙең юғары формаһы булараҡ башҡорт теле һәм әҙәби башҡорт теле тураһында аңлатма (дөйөм күҙҙаллау).

Яҡшы һәм дөрөҫ телмәрҙеңтөп күрһәткестәре (дөйөм күҙҙаллау). Әҙәби тел нормаларын һаҡлау – дөрөҫ телмәр.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең төп орфоэпик нормалары. Дөрөҫ әйтеү нормалары.

Орфоэпик һүҙлектәрҙә тыйылған билдәләр.

Һүҙ мәғәнәһенең маркеры булараҡ баҫым.

Омографтар (терминды ҡулланмайынса): һүҙҙең мәғәнәүи маркеры булараҡ баҫым. Орфоэпик норманың әйтелеш варианттары. Һүҙбәйләнеш кимәлендәге әйтелеш варианттары.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең төп лексик нормалары. Һүҙ ҡулланыуҙың төп нормалары: һүҙҙе дөрөҫ һайлау, билдәләнгән предметҡа йә ысынбарлыҡ күренештәренә максималь тап килеүе.

Хәҙерге башҡорт әҙәби телендә исем, сифат, ҡылымды ҡулланыуҙың лексик нормалары. Телмәрҙә исем, сифат, ҡылымдарҙы ҡулланыуҙың лексик нормалары стилистик вариантта (китап, дөйөм ҡулланыш, аралашыу һәм ябай телдә).

Синоним, антоним, омонимдарҙы ҡулланыуҙа лексик нормалар (терминдарҙы ҡулланмайынса, өйрәнеү кимәлендә).

Хәҙерге башҡорт әҙәби телендә исем, сифат, ҡылымдың ҡулланыуҙың лексик нормаларҙы боҙоуҙың типик миҫалдары.

Телмәр этикет ҡағиҙәләре: нормалары һәм традициялары. Аралашыуҙа телмәр этикетының ныҡынған формалары. Башҡорт телмәр этикетында мөрәжәғәт итеү. Башҡорт телендә мөрәжәғәт итеү этикет нормаларының тарихы. Яңғыҙлыҡ исемдәр, туғанлыҡ атамалары, профессия, вазифа; йәше һәм енес яғынанмөрәжәғәт итеүҙәрҙе ҡулланыу үҙенсәлектәре. Мөрәжәғәт итеү кешенең тәрбиә кимәле, аралашыусыға мөнәсәбәте, эмоциональ торошоноң күрһәткесе. Официаль һәм официальбулмаған телмәр ситуацияларында мөрәжәғәт итеү. Хәҙерге заманда таныш булмаған кешегә мөрәжәғәт итеү формулары.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең төп грамматик нормалары.

## Текст

Текст һәм уның төп билдәләре.

Телмәрҙең функциональ-мәғәнәүи төрө: һүрәтләү, хикәйәләү, фекерләү; уларҙың үҙенсәлектәре.

Һөйләмдәрҙе һәм текстың өлөштәрен бәйләү саралары: һүҙ формаһы, тамырҙаш һүҙҙәр, синонимдар, антонимдар, эйәлек алмаштары, һүҙҙәрҙең ҡабатланыуы.

Тексты мәғлүмәти эшкәртеү: текстың ябай һәм ҡатмарлы планы.

## Телдең функциональ төрҙәре (дөйөм күҙаллау)

Телдең функциональ төрҙәре тураһында дөйөм төшөнсә (һөйләү телмәре, фукциональ стилдәр, матур әҙәбиәт теле).

## Тел системаһы

### Фонетика. Графика. Орфоэпия

Өн һәм хәреф. Алфавит (ҡабатлау).Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙең системаһы.Һуҙынҡы өндәрҙең дөрөҫ әйтелеше.Тартынҡылыларҙың дөрөҫ әйтелеше һәм яҙылышы.Өн һәм хәрефтәрҙең нисбәте. Һүҙгә фонетик анализ.Ижек. Ижек төрҙәре.Баҫым. Башҡорт һәм рус телдәрендә баҫым.Лингвистиканың бүлеге булараҡ орфоэпия.

**Орфография**

Һүҙҙәрҙең һәм һүҙ формаларының дөрөҫ яҙылышы булараҡ орфография.

**Лексикология**

Лингвистиканың бүлеге булараҡ лексикология.Һүҙҙәрҙең лексик мәғәнәһен аңлатыу (тамырҙаш һүҙҙәр һайлау, синоним һәм антонимдар табыу); һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатыу (контекст буйынса, аңлатмалы һүҙлек ярҙамында).

Бер һәм күп мәғәнәле һүҙҙәр. Тура һәм күсмә һүҙҙәрҙең мәғәнәләре (ҡабатлау).

Һүҙҙәрҙең тематик төркөмө. Синонимдар. Антонимдар. Омонимдар.

Төрлө төрҙәге лексик һүҙлектәр (аңлатмалы һүҙлек, синоним, антоним, омоним һүҙлектәр) һәм туған телдең һүҙлек байлығын үҙләштереүҙә уларҙың роле.

Һүҙгә лексик анализ (өйрәнеү кимәлендә).

**Морфемика**

Тел ғилеме бүлеге булараҡ морфемика.Морфемика һәм һүҙьяһалыш. Һүҙҙең иң бәләкәй киҫәге булараҡ морфема. Морфема төрҙәре.

Һүҙьяһалыш һәм һүҙҙең формаһы үҙгәреүе. Һүҙҙең нигеҙе. Ялғау – форма барлыҡҡа килтереүсе морфема.

Тамыр, аффикстар – морфеманың төрҙәре.Һүҙҙәрҙең тамыр морфемаларҙан һәм аффиксаль морфемаларҙан килеүе.

**Морфология. Орфография**

Грамматика бүлеге булараҡ морфология.Һүҙҙәрҙең грамматик мәғәнәһе.Һүҙҙең лексик-грамматик разряды булараҡ һүҙ төркөмдәре. Һүҙ төркөмдәрен классификациялау принцибы.

Башҡорт телендә һүҙ төркөмдәренең системаһы. Үҙаллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәре.Яңғыҙлыҡ һәм ҡыҫҡартылған исемдәрҙе дөрөҫ яҙыу.

Сифат һәм ҡылымдарҙы өйрәнелгән орфограммалар менән дөрөҫ яҙыу.

**Исем**

Һүҙ төркөмө булараҡ исем.Исемдәрҙең телмәрҙәге роле.Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр. Исемдәрҙең яһалышы.Ялғауҙар ҡушылыу юлы менән исем яһалыу. Һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән исем яһау. Һүҙҙәрҙе парлау юлы менән исем яһалыу. Һүҙҙәрҙе бәйләү һәм ҡыҫҡартыу юлы менән исем яһалыу.

Исемдәргә морфологик анализ үткәреү.

**Сифат**

Һүҙ төркөмө булараҡ сифат.Сифаттың телмәрҙәге роле.Сифаттарҙың дөйөм грамматик билдәләре, морфологик билдәләре һәм синтаксик функцияһы.

Сифатҡа морфологик анализ үткәреү.

**Ҡылым**

Һүҙ төркөмө булараҡ ҡылым.Ҡылымдарҙың заман (үткән, хәҙерге, киләсәк), зат һәм һан менән үҙгәреше. Ҡылым һөйкәлештәре (бойороҡ, хәбәр, шарт һәм теләк). Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар. Тамыр һәм нигеҙ ҡылымдар. Ҡылымдарҙың яһалышы. Ҡылымдарҙың затлы формалары.

**Синтаксис. Пунктуация**

Лингвистика бүлеге булараҡ синтаксис һәм тыныш билдәләре. Һүҙбәйләнеш.

Синтаксис тураһында дөйөм төшөнсә. Тыныш билдәләре тураһында аңлатма. Тыныш билдәләре һәм уларҙың функцияһы.Һөйләм һәм һүҙбәйләнеш.Һүҙбәйләнеш һәм уның билдәләре. Һүҙбәйләнештә һүҙҙәрҙең бәйләнеү юлдары.

Һүҙбәйләнешкә синтаксик анализ.

**Һөйләм**

Хәбәр, һорау, өндәү һәм өндәү һөйләмдәрҙең мәғәнәүи һәм интонацион үҙенсәлектәре (ҡабатлау).Һөйләмдең баш киҫәктәре. Эйә менән хәбәр.Йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәр.Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре: аныҡлаусы, тултырыусы, хәлдәр.

Ябай ике составлы һөйләмдәргә синтаксик анализ.

**Һөйләмдең тиң киҫәктәре**

Тиң киҫәкле һөйләмдәр, уларҙың интонацион һәм пунктуацион үҙенсәлектәре.

Тиң киҫәкле һөйләмдәр. Һөйләмдәрҙә тиң киҫәктәрҙең булыу шарттары.Тиң киҫәктәрҙең бәйләнеү юлдары. Тиң киҫәкле һөйләмдәрҙең интонацион һәм пунктуацион үҙенсәлектәре

**Өндәш һүҙҙәр**

Өндәш һүҙҙәр, уларҙың функцияһы. Өндәш һүҙле һөйләмдәрҙең интонацияһы. Инеш һүҙ һәм инеш һөйләмдәр. Өндәш һүҙ менән һөйләмдәҙең, интонация үҙенсәлектәре.Өндәш һүҙ менән һөйләмдәрҙә, инеш һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.

**Ҡушма һөйләм**

Ҡушма һөйләмдәрҙәге ябай һөйләмдәрҙең интонация һәм ярҙамсы һүҙҙәр менән бәйләнеше.

**Тура телмәр**

Тура телмәрле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.

**Уҡыусыларҙың белемдәрен тикшереү һәм үтелгәндәрҙе ҡабатлау**

Үтелгән материалдарҙы ҡабатлау, контроль эш яҙҙырыу, алынған белемдәрен коррекциялау буйынса эштәр башҡарыу.

## 6 класс

### Тел тураһында дөйөм төшөнсә

Башҡорт теле – Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле. Әҙәби тел тураһында аңлатма.

### Тел һәм телмәр

Төрлө төрҙәге монологтар (хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү). Диалог төрҙәре: (диалог-аралашыу, диалог-фекер алышыу һ.б).

### Телмәр мәҙәниәте

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең төп орфоэпик нормалары (ҡабатлау).

Хәҙерге башҡорт теленең төп грамматик нормалары. Һүҙлектәрҙә һәм белешмәләрҙә грамматик нормаларҙың варианттарын сағылдырыу. Башҡорт һәм башҡа телдәрҙәге исем, фамияларҙы үҙгәртеү; географик объекттарҙың атамалары.

Телмәрҙә типик грамматик хаталар. Исем, сағыштырыу формаһында сифаттарҙы, ҡылым, алмаш, һандарҙы ҡулланыу нормалары. Исем, уртаҡ, сифат, хәл ҡылымдарҙы, рәүеш һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен ҡулланыу нормалары.

Хәҙерге башҡорт теленең төп лексик нормалары.

Килеп сығышы яғынан һүҙҙәрҙе айырыу: төп башҡорт һәм үҙләштерелгән һүҙҙәр; актив һәм пассив һүҙлек запасына инеү яғынан айырыу: неологизмдар, иҫкергән һүҙҙәр (историзмдар һәм архаизмдар); ҡулланышы яғынан һүҙҙәрҙе айырыу: дөйөм ҡулланылышлы һүҙҙәр һәм ҡулланыу яғынан сикләнгән һүҙҙәр (диалект һүҙҙәре, терминдар, профессионализмдар, жаргон һүҙҙәр); һүҙҙең стилистик биҙәлешен билдәләү.

Текста фразеологизмдар, афоризмдар, ҡанатлы һүҙҙәрҙе айырыу; фразеологизмдарҙы

ҡулланыу ситуацияларын характерлау.

Телмәр этикетының милли үҙенсәлектәре. Милли аралашыу этикетының нигеҙендә булыусы аралашыу этикет принциптары. Аралашыуҙың башы һәм тамамлау, маҡтау һәм комплимент, рәхмәт белдереү, ҡайғы уртаҡлашыу, тынысландырыуҙың этикет формалары.

**Текст**

Тексҡа мәғәнәүи анализ: уның композицион үҙенсәлектәре, микротема һәм абзацтар, текста һөйләмдәрҙе бәйләү саралары һәм ысулдары.

Тексты мәғәнәүи ҡайтанан эшкәртеү.

Телмәр төрө буларак һүрәтләү. Кешенең тышҡы ҡиәфәтен һүрәтләү. Торлаҡты һүрәтләү. Тәбиғәтте һүрәтләү. Торған ерҙе һүрәтләү.

**Телдең функциональ төрлөлөгө**

Рәсми йәки эш ҡағыҙҙары стиле.Ғариза. Расписка. Фәнни стиль. Һүҙлек мәҡәләһе. Фәнни хәбәрҙәр.

**Тел системаһы**

**Лексикология**

Башҡорт теленең һүҙлек составы.Һүҙҙәрҙең килеп сығышы буйынса төркөмләнеүе: төп башҡорт һүҙҙәре һәм үҙләштерелгән һүҙҙәр.

Башҡорт телендә дөйөм һәм тар ҡулланылышлы һүҙҙәр: диалектизм, профессиональ һүҙҙәр.

Башҡорт теленең лексикаһы актив һәм пассив һүҙлек запасы күҙлегенән: иҫкергән һүҙҙәр (историзм һәм архаизмдар), яңы һүҙҙәр (неологизмдар).

Фразеологик берәмектәр. Афоризмдар.

**Һүҙьяһалыш. Орфография**

Тел ғилеме бүлеге буларак һүҙьяһалыш.

Һүҙьяһалыш. Һүҙ составы. Тамыр һүҙ, һүҙҙең нигеҙе (яһалма һүҙ). Ялғауҙар һәм уларҙың төрҙәре. Һүҙ яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙар. Һүҙьяһалыш юлдары.

Телдә һүҙьяһалыш ысулдары.

**Морфология. Орфография**

**Исем**

Исемдәрҙең һан менән үҙгәреше.Күплек ялғауҙарының дөрөҫ яҙылышы. Исемдәрҙең эйәлек заты. Эйәлек заты ялғауҙарының дөрөҫ яҙылышы.

Исемдәрҙең хәбәрлек заты.Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше.

**Сифат**

Сифаттарҙаң исем урынында килеүе һәм һөйләмдәге роле. Сифаттарҙың яһалышы. Төп һәм шартлы сифаттар. Сифат дәрәжәләре. Сифаттарҙың дөрөҫ яҙылышы. Синоним сифаттар.

**Һан**

Һан тураһында дөйөм төшөнсә. Ябай һәм ҡушма һандар. Һан төркөмсәләре. Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы.

**Алмаш**

Алмаш тураһында төшөнсә. Алмаш төркөмсәләре.Алмаштарҙың килеш менән үҙгәреше.

**Ҡылым. Ҡылым төркөмсәләре.**

**Исем ҡылым.** Исем ҡылымдың мәғәнәһе һәм яһалышы. Исем ҡылымдың исемгә күсеүе. Исем ҡылымдың исемгә оҡшаш яҡтары: һан, килеш, эйәлек заты менән үҙгәреүе. Исем ҡылымдың барлыҡ һәм юҡлыҡ формаһы. Исем ҡылымдың һөйләмдәге роле.

**Уртаҡ ҡылым.** Уртаҡ ҡылымдарҙың мәғәнә һәм яһалышы. Уртаҡ ҡылымдың юҡлыҡ формаһы.

**Сифат ҡылым.** Сифат ҡылымдың мәғәнәһе. Сифат ҡылымдың заман формалары: 1) үткән заман сифат ҡылым; 2) киләсәк заман сифат ҡылым; 3) хәҙерге заман сифат ҡылым.

**Хәл ҡылым.** Хәл ҡылымдың мәғәнәһе. Хәл ҡылымдың төрҙәре.

Ҡылым йүнәлештәре.

Ҡылым күләмдәре. Ҡылым рәүешлеге.

**Рәүеш**

Рәүеш тураһында төшөнсә.Рәүештең төркөмсәләре. Рәүештең сифат менән оҡшаш һәм айырмалы яҡтары. Рәүеш дәрәжәләре. Рәүештең яһалышы. Рәүештәрҙең дөрөҫ яҙылышы.

**Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре**

Ярҙамсы һүҙ төркөмдәренә дөйөм характеристика Ярҙамсы һүҙ төркөмдәренең үҙ аллы һүҙ төркөмдәренән айырмалыҡтары. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәренең функцияһы. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәренең яҙылышы

**Теркәүес**

Теркәүес тураһында төшөнсә.Теркәүестәрҙең бүленеше. Теркәүестәрҙең дөрөҫ яҙылышы.

**Бәйләүес**

Бәйләүестәр тураһында дөйөм төшөнсә. Бәйләүестәрҙең бүленеше.

**Киҫәксә**

Киҫәксә тураһында төшөнсә.Киҫәксәләрҙең бүленеше. Киҫәксәләрҙең дөрөҫ яҙылышы.

**Мөнәсәбәт һүҙҙәр**

Мөнәсәбәт һүҙҙәр тураһында төшөнсә.Мөнәсәбәт һүҙҙәрҙең телмәрҙәге роле. Һөйләмдә мөнәсәбәт һүҙҙәрҙең интонацион һәм тыныш билдәләре яғынан айырыу.

**Ымлыҡ**

Ымлыҡ тураһында төшөнсә.Ымлыҡтарҙың дөрөҫ яҙылышы.

**Оҡшатыу һүҙҙәре**

Оҡшатыу һүҙҙәре тураһында төшөнсә.

## 7 класс

### Тел тураһында дөйөм төшөнсә

Башҡорт теле – беҙҙең туған телебеҙ.

Тел, мәҙәниәт һәм халыҡ тарихының бәйләнеше.

Башҡорт теле – башҡорт халҡының милли теле, милли мәҙәниәтте сағылдырыусы форма.

Тел, мәҙәниәт һәм халыҡ тарихының бәйләнеше.

### Тел һәм телмәр

Төрлө төрҙәге монологтар (хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү) (ҡабатлау).

Диалог төрҙәре: эш-хәрәкәткә ниәтләндереү, фекер алышыу, мәғлүмәтте ҡабул итеү, мәғлүмәтте еткереү.

### Телмәр мәҙәниәте

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең төп орфоэпик нормалары (ҡабатлау).

Хәҙерге башҡорт теленең төп грамматик нормалары (ҡабатлау). Һүҙлектәрҙә һәм

белешмәләрҙә грамматик нормаларҙың варианттарын сағылдырыу. Телмәрҙә типик грамматик хаталар.

Терминдар һәм телмәр теүәллеге. Ғилми һәм публицистик телмәр стилендә терминдарҙың ҡулланыу нормалары. Публицистикала терминдарҙы ҡулланыу үҙенсәлектәре.

Терминдарҙы ҡулланыуға бәйле типик телмәр хаталары.

Башҡорт телендә ярашыу һәм башҡарылыу осраҡтарындағы ауырлыҡтар. Хәбәр менән эйәнең яраҡлашыуында типик грамматик хаталар. Яраҡлашыу һәм башҡарылыуҙа типик грамматик хаталар. Хәҙерге грамматик һүҙлек һәм белешмәләрҙә грамматик нормаларҙың варианттарын сағылдырыу.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең төп стилистик нормалары. Телмәрҙә типик синтаксик хаталар. Ҡушма һөйләмдәр, инеш һүҙҙәр һәм инеш һөйләмдәр менән, айырымланған киҫәктәр һәм тура телмәрле һөйләмдәр төҙөүҙә типик хаталар.

Аралашыуҙа башҡорт этикет телмәр манераһы. Тупаҫ һүҙҙәр, фразаларҙы ҡулланыуҙы тыйыу. Аралашыуҙа ҡәтғилекте ҡулланмау. Һүҙһеҙ аралашыу этикеты. Һүрәтләү жестарын ҡулланыу этикеты.

**Текст**

Телмәр әҫәре булараҡ текст. Текстың төп билдәләре (дөйөмләштереү).

Тексты мәғлүмәти эшкәртеү: текст планы (ябай, ҡатмарлы (ҡабатлау); атама, һорау, тезислы); текстың төп һәм икенсел мәғлүмәте.

Текста һөйләмдәрҙең бәйләнеш ысулдары һәм саралары (дөйөмләштереү). Текста тел һүрәтләү саралары: фонетик, һүҙъяһалыш, лексик (дөйөмләштереү).

**Телдең функциональ төрлөлөгө**

Публицистик стиль: ҡулланыу сфераһы, төп бурыс (теге йәки был ысынбарлыҡтағы проблемаларға билдәле мөнәсәбәт булдырыу маҡсатынан уҡыусыларға һәм тыңлаусыларға тәьҫир итеү), стиль һыҙаттары (логик бәйләнешлелекте һәм образлылыҡты, эмоционалелек, баһалаусанлыҡ), характерлы тел һүрәтләү саралары ( лексик, морфологик, синтаксик). Публицистик стилдең төп жанрҙары (сығыш, мәҡәлә, интервью, очерк, репортаж).

Рәсми эш ҡағыҙҙары (ҡабатлау): ҡулланыу сфераһы (административ-хоҡуҡи, эш башҡарыу сфераһында), төп бурыс (теүәл мәғлүмәтте хәбәр итеү), стиль һыҙаттары (абстрактлылыҡ, теүәлелек, ҡыҫҡалыҡ, шаблонлыҡ), характерлы тел һүрәтләү саралары.

Рәсми эш ҡағыҙҙары стиле жанры булараҡ инструкция. Инструкция тексының структураһы һәм йөкмәткеһенең үҙенсәлектәре. Инструкция текстарының уҡыу-уҡытыу маҡсатында ҡулланыу.

**ТЕЛ СИСТЕМАҺЫ**

**Синтаксис. Пунктуация**

Лингвистиканың бүлеге булараҡ синтаксис.Синтаксистың берәмеге булараҡ һүҙбәйләнеш һәм һөйләм.

Пунктуация. Тыныш билдәләренең функцияһы.

**Һүҙбәйләнеш**

Һүҙбәйләнештең яһалыу юлдары. Эйәртеүле бәйләнештең төрҙәре: ярашыу, башҡарылыу, йәнәшәлек, һөйкәлеү. Һүҙбәйләнеш һәм ҡушма һүҙ. Нығынған һүҙбәйләнештәр.

**Һөйләм һәм уның төп билдәләре. Һөйләм төрҙәре**

Һөйләмдең төп билдәләре: мәғәнәүи һәм интонацион тамамланыу, грамматик

формалашып етеү.Әйтелеү маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәре (ҡабатлау).

Грамматик нигеҙҙәренең иҫәбе буйынса һөйләм төрҙәре (ябай, ҡушма).

Тулы һәм кәм һөйләмдәр. Кәм һөйләмдәрҙең диалогик телмәрҙә ҡулланыуы, уларҙың интонацияһы.

**Ябай һөйләм**

Һөйләмдең баш киҫәктәре.Эйә. Хәбәр. Эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ.

**Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре**

Аныҡлаусы. Тиң һәм тиң булмаған аныҡлаусылар. Өҫтәлмәлек. Тултырыусы. Тура һәм ситләтелгән тултырыусы. Хәлдәр. Рәүеш хәлдәре. Күләм-дәрәжә хәлдәре. Ваҡыт хәлдәре. Урын хәлдәре. Шарт хәлдәре. Сәбәп хәлдәре. Маҡсат хәлдәре. Кире хәлдәр. Һөйләмдә һөйләм киҫәктәренең урынлашыу тәртибе.

**Бер составлы һөйләмдәр**

Ике һәм бер составлы һөйләмдәр араһында грамматик айырмалылыҡ.

Бер составлы һөйләмдәр, уларҙың грамматик билдәләре. Бер составлы һөйләм төрҙәре.Билдәле эйәле һөйләм. Билдәһеҙ эйәле һөйләм. Эйәһеҙ һөйләм. Атама һөйләм. Тулы һәм кәм һөйләмдәр. Тиң киҫәкле һөйләмдәр. Тиң киҫәктәр эргәһендә тыныш билдәләре. Тиң киҫәкле эргәһендә дөйөмләштереүсе һүҙҙәр.

Эйәрсән киҫәктәрҙең иҫәбе буйынса һөйләм төрҙәре (тарҡау һәм йыйнаҡ һөйләмдәр).

**Тиң киҫәкле һөйләмдәр**

Тиң киҫәктәр эргәһендә дөйөмләштереүсе һүҙҙәр.Тиң киҫәкле һөйләм эргәһендә тыныш билдәләре.Тиң киҫәктәр эргәһендә дөйөмләштереүсе һүҙҙәр эргәһендә тыныш билдәләре.

**Өндәш һүҙ. Инеш һүҙ һәм инеш һөйләмдәр**

Өндәш һүҙҙәр эргәһендә тыныш билдәләре.

**Инеш һүҙ һәм инеш һөйләмдәр.** Инеш һүҙ һәм инеш һөйләмдәр эргәһендә тыныш билдәләре.

**Һөйләмдең айырымланған эйәрсән киҫәктәре**

Айырымланыу тураһында төшөнсә. Өҫтәлмәлектәрҙең айырымланыуы. Аныҡлаусыларҙың айырымланыуы тураһында. Хәл әйтемдәре һәм уларҙың үҙенсәлектәре. Хәл әйтемдәренең айырымланыуы.

**Тура һәм ситләтелгән телмәр**

Тура телмәрле һөйләмдәр. Уларҙа тыныш билдәләре.

**8 класс**

**Тел тураһында дөйөм төшөнсә**

Төрки телдәренең береһе булараҡ башҡорт теле.

**Тел һәм телмәр**

Һөйләү һәм яҙма телмәр, монологик һәм диалогик, полилог (ҡабатлау).

Телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре: һөйләү, яҙыу, тыңлау, уҡыу (ҡабатлау).

Тормош һәм уҡыу тәжрибәһенә таянып, иллюстрация, фотография, сюжетлы картиналарҙы ҡулланып, тема һәм аралашыу шарттарына ҡарап, төрлө коммуникатив йүнәлештә һөйләү һәм яҙма хәбәрҙәр булдырыу,

**Телмәр мәҙәниәте**

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең төп орфоэпик нормалары (ҡабатлау).

Телмәрҙә типик акцент хаталары.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең төп лексик нормалары (ҡабатлау).

Телмәрҙә терминдар һәм теүәллек. Рәсми эш ҡағыҙҙарында һәм ғилми стилдә терминдарҙы ҡулланыу нормалары.

Терминдарҙы ҡулланыу менән бәйле типик телмәр хаталары (ҡабатлау).

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең төп синтаксик нормалары (ҡабатлау). Телмәрҙә типик синтаксик хаталар. Ҡушма, эйәртеүле, теҙмә, теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе төҙөүҙә типик хаталар.

Телмәр этикетында актив процестар. Сәләмләү һәм хушлашыуҙың яңы варианттары, яңғыҙлыҡ исемдәрҙе ҡулланыу; уларҙы баһалау. Телмәр агрессияһы.

Аралашыуҙа телмәр агрессияһына ҡаршы торорлоҡ телмәр тактикаһы этикеты. Телмәр формуларының синонимлығы.

**Текст**

Текст һәм уның төп билдәләре (ҡабатлау). Телмәр төрҙәренең фукциональ-мәғәнәүи үҙенсәлектәре (һүрәтләү, хәбәр итеү, фекерләү) (ҡабатлау).

Тексты мәғәнәүи эшкәртеү: төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәт алыу; лингвистик һүҙлектәр ҡулланыу; тезистар, конспекттар.

**Телдең функциональ төрлөлөгө**

Рәсми эш ҡағыҙҙары стиле. Уларҙы ҡулланыу өлкәһе, функциялары, тел үҙенсәлектәре.

Рәсми эш ҡағыҙҙары стиле жанрҙары (ғариза, аңлатмалы яҙыу, автобиография, характеристика).

Фәнни стиль. Уларҙы ҡулланыу өлкәһе, функциялары, тел үҙенсәлектәре. Фәнни стиль жанрҙары (реферат, фәнни темаға доклад). Текста телдең төрлө функциональ төрҙәренең бәйләнеше, текста һөйләмдәрҙең бәйләнеү саралары.

**ТЕЛ СИСТЕМАҺЫ**

**Синтаксис. Пунктуация**

**Ҡушма һөйләм**

Ҡушма һөйләм тураһында төшөнсә (ҡабатлау). Ҡушма һөйләмдәрҙе төрҙәре буйынса классификациялау. Ҡушма һөйләм өлөштәренең мәғәнәүи, структур һәм интонацион берҙәмлеге.

Пунктуация. Тыныш билдәләренең функцияһы.

**Теҙмә ҡушма һөйләм**

Теҙмә ҡушма һөйләм тураһында аңлатма, уның төҙөлөшө. Теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙең төрҙәре. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләм. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең ҡуйылышы.Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр.

**Эйәртеүле ҡушма һөйләм**

Баш һөйләм менән эйәрсән һөйләм. Эйәрсен һөйләмдең баш һөйләмгә бәйләнеү саралары һәм уларҙа тыныш билдәләре. Эйәрсән һөйләм төрҙәре тураһында дөйөм төшөнсә.

Эйәрсән һөйләм төрҙәре. Эйә һөйләм. Хәбәр һөйләм. Аныҡлаусы һөйләм. Тултырыусы һөйләм. Ваҡыт һөйләм. Урын һөйләм. Сәбәп һөйләм. Маҡсат һөйләм. Рәүеш һөйләм. Күләм-дәрәжә һөйләм. Сағыштырыу һөйләм. Шарт һөйләм. Кире һөйләм.

**Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр**

Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең ҡуйылышы.

**Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр**

Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең ҡуйылышы. Теҙемдәр (периодтар). Теҙемдәрҙең үҙенсәлектәре.

**Тыныш билдәләре**

Һөйләм аҙағында тыныш билдәләре (нөктә, һорау, өндәү). Теркәүесеһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә, ҡатмарлы синтаксик конструкцияларҙа нөктәле өтөр, һыҙыҡ, ике нөктә ҡуйылыу осраҡтары.

## 9 класс

### Тел тураһында дөйөм төшөнсә

Тел-үҫә барыусы ижтимағи күренеш. Башҡорт теле – башҡорт халҡының милли теле. Башҡорт теле башҡа ҡәрҙәш телдәр араһында. Әҙәби тел һәм диалект. Башҡорт теленең диалекттары. Башҡорт әҙәби теле һәм уның үҫеше.

### Тел һәм телмәр

Һөйләү һәм яҙма телмәр, монологик һәм диалогик, полилог (ҡабатлау)

Телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре: һөйләү, яҙыу, тыңлау, уҡыу (ҡабатлау).

Аудирование (тыңлау) төрҙәре: һайланма, таныштырыу, ентекле (йомғаҡлау, практик ҡулланыу).

Уҡылған йә тыңланған тексты ентекле, ҡыҫҡартып, һайлап һөйләп биреү.

Телмәр практикаһында телдән һәм яҙма фекереңде еткереү барышында башҡорт әҙәби теленең тел нормаларын (орфоэпик, лексик, грамматик, стилистик, орфографик, пуктуацион) һаҡлау.

Дәреслек, лингвистик һүҙлектәр, белешмә әҙәбиәт менән эшләү алымдары.

### Телмәр мәҙәниәте

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең төп орфоэпик нормалары (ҡабатлау). Әйтлештә һәм баҫымда актив процестар. Хәҙерге орфоэпик һүҙлектәрҙә әйтелеш варианттарының сағылышы.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең төп лексик нормалары (ҡабатлау).

Синонимдар, антонимдар, омонимдарҙы ҡулланыуҙың мәғәнәүи, стилистик үҙенсәлектәре.

Һүҙҙәрҙең лексик һәм теүәл ярашыуы. Ирекле һәм ирекһеҙ лексик ярашыу. Лексик ярашыуҙы боҙоуға бәйле типик хаталар.

Телмәрҙә артыҡлыҡ һәм теүәллек. Тавтология. Плеоназм.

Хәҙерге аңлатмалы һүҙлектәр. Хәҙерге һүҙлектәрҙә лексик нормалар варианттарын сағылдырыу.  Һүҙлек билдәләре.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең төп грамматик нормалары (ҡабатлау).

Хәҙерге грамматик һүҙлектәрҙә һәм белешмәләрҙә грамматик норма варианттарын сағылдырыу. Һүҙлек билдәләре.

Терминология һәм телмәр теүәллеге (ҡабатлау). Публицистик, фәнни, йәнле һөйләү, матур әҙәбиәт, рәсми эш ҡағыҙҙары стилендә терминдарҙы ҡулланыу нормалары.

Терминдарҙы ҡулланыу менән бәйләнешле типик хаталар (ҡабатлау).

Телмәрҙә типик грамматик хаталар. Исем, сифат, ҡылым, алмаштарҙың ҡуланышында нормалар (ҡабатлау).

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең төп синтаксик нормалары (ҡабатлау).Телмәрҙә типик синтаксик хаталар. Һүҙбәйләнеш, ҡушма һөйләмдәрҙе төҙөүҙә типик хаталар (ҡабатлау).

Электрон мөхит аралашыуында этика һәм этикет. Этикет тураһында төшөнсә. Интернет этикеты – яҙышыу. Интернет-дискуссия, интернет-полемикала этикет ҡағиҙәләре, этик нормалар. Эшлекле аралашыу ситуацияларында телмәр этикеты.

## Текст

Текст һәм унаң билдәләре (йомғаҡлау). Телмәрҙең фукциональ-мәғәнәүи төрҙәре (йомғаҡлау).

Текста төрлө фукциональ-мәғәнәүи телмәр төрҙәренең яраҡлашыуы, шулай уҡ маутур әҙәбиәт әҫәрҙәрендә телдең төрлө функциональ төрлөлөгө элементтарының яраҡлашыуы.

Төрлө фукциональ-мәғәнәүи телмәр төрҙәренә ҡараған текстарҙа тел һүрәтләү сараларының ҡулланыу үҙенсәлектәре. Тексты мәғлүмәти эшкәртеү.

## Телдең функциональ төрлөлөгө

Телдең функциональ төрлөлөгө (һөйләү телмәре; функциональ стилдәр- йәнле һөйләү, матур әҙәбиәт, фәнни, публицистик, рәсми эш ҡағыҙҙары, хаттар; матур әҙәбиәт теле (ҡабатлау, йомғаҡлау)

Матур әҙәбиәт теле һәм унаң хәҙерге башҡорт теленең башҡа функциональ төрлөлөгөнән айырмалығы. Әҙәби телмәрҙең төп билдәләре: тел-һүрәтләү сараларының, шулай уҡ телдең башҡа функциональ төрлөлөгөнөң тел сараларының киң ҡулланышы.

Башҡорт теленең төп тел-һүрәтләү саралары, телмәрҙә уларҙың ҡулланышы.

Фәнни стиль.

Ҡулланыу сфераһы, функциялары, телмәр арлашыуының типик ситуациялары, телмәр бурыстары, тел саралары.

Тезис, конспект, реферат, рецензия яҙыуҙың үҙенсәлектәре.

Йәнле һөйләү стиле. Структур элементтары һәм тел үҙенсәлектәре.

Һөйләү телмәре. Телдән аралашыуҙы характерлаусы мәҡәлдәр.

Аралашыу ҡағиҙәһе. Үтенес, ғәфү үтенеү.Бәхәс, бәхәс төрҙәре. Бәхәсте алып барыуҙың әҙәпле алымдары.

Матур әҙәбиәт стиле. Структур элементтары һәм тел үҙенсәлектәре.

Башҡорт теленең төп тел-һүрәтләү саралары һәм уларҙың телмәрҙә ҡулланышы.

Рәсми эш ҡағыҙҙары стиле. Эшлекле хат, унаң структур элементтары һәм тел үҙенсәлектәре.

Рәсми эш ҡағыҙҙары стиле: ҡулланыу сфераһы (административ –хоҡуҡи, эш башҡарыу сфераһында), төп бурыстары (теүәл мәғлүмәтте еткереү), стил һыҙаттары (абстрактлығы, теүәллек, ҡыҫҡалыҡ, шаблонлыҡ), характерлы тел саралары.

Рәсми эш ҡағыҙҙары стиле булараҡ инструкция. Инструкция тексының йөкмәтке һәм структура үҙенсәлеге. Инструкция текстарын уҡыу-уҡытыу маҡсатында ҡулланыу.

Уҡыу-уҡытыуҙа фәнни стиль. Доклад, белдермә (хәбәрҙәр). Проект яҡлауҙа оппоненттың телмәре. Ҡулланыу сфераһы, функциялары, аралышыуҙа типик ситуациялар, телмәр бурыстары, тел саралары.

Фәнни стилдең төп жанрҙары: тезис, конспект, реферат, рецензия; уларҙың үҙенсәлектәре. Фәнни стиль тексты төҙөүҙә нормалар.

Тезис, конспект, реферат, рецензия яҙыуҙың үҙенсәлектәре.

Публицистик стиль: ҡулланыу сфераһы (күмәкләп аралашыу), төп бурыс (теге йәки был ысынбарлыҡтағы проблемаларға билдәле мөнәсәбәт булдырыу маҡсатынан уҡыусыларға һәм тыңлаусыларға тәьҫир итеү), стиль һыҙаттары (логик бәйләнешлелекте һәм образлылыҡты, эмоционалелек, баһалаусанлыҡ), характерлы тел һүрәтләү саралары ( лексик, морфологик, синтаксик). Публицистик стилдең төп жанрҙары (сығыш, мәҡәлә, интервью, очерк, репортаж).

Хаттар стиленең структур элементтары һәм тел үҙенсәлектәре.

## ТЕЛ СИСТЕМАҺЫ

**Фонетика. Графика. Орфоэпия.**

Лингвистиканың бүлеге буларак фонетика һәм графика (кабатлау).

Фонетика. Графика. Орфоэпия. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Сингармонизм. Ассимиляция. Диссимиляция. Ижек. Баҫым. Һүҙгә фонетик анализ.

**Орфография**

Лингвистиканың бүлеге буларак орфография (кабатлау).

**Лексикология**

Лингвистиканың бүлеге буларак лексикология (кабатлау).

Һүҙҙең лексик мәғәнәһен аңлатыуҙа төп ысулдары (тамырҙаш һүҙҙәр, синоним, антонимдарҙы табыу) һүҙҙең мәғәнәһен аңлатыуҙың төп ысулдары (контекст буйынса, аңлатмалы һүҙлектәр ярҙамында).

Һүрәтләү саралары. Эпитет. Сағыштырыу. Метафора. Синонимдар һәм уларҙы телмәрҙә кулланыу. Грамматик синонимдар. Телмәрҙә антитезаны файҙаланыу.

Һүҙгә лексик анализ.

**Морфология лингвистаканың бүлеге**

Морфология тел тураһындағы фәндең бер бүлеге (кабатлау). Һүҙҙең грамматик мәғәнәһе, уның лексик мәғәнәһенән айырмалығы. Башкорт телендә һүҙ төркөмдәре системаһы. Үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ тәркөмдәре

**Исем**

Һүҙ төркөмө буларак исем, уның дөйөм грамматик мәғәнәһе, морфологик билдәләре, синтаксик функциялары (кабатлау). Уртаклык һәм яңғыҙлык исемдәр. Башкорт телендә һан, килеш, исемдәрҙең эйәлек һәм хәбәрлек категориялары.

**Сифат**

Һүҙ төркөмө буларак сифат (кабатлау). Морфологик билдәләре, синтаксик функцияһы. Төп һәм шартлы сифаттар. Сифат дәрәжәләре; сифаттарҙың яһалышы, уларҙың дөрөҫ яҙылышы.

**Һан**

Һүҙ төркөмө буларак һан (кабатлау), уның морфологик билдәһе, синтаксик функцияһы. Һан төркөмсәләре. Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы.

**Алмаш**

Һүҙ төркөмө буларак алмаш (кабатлау), уның морфологик билдәһе, синтаксик функцияһы. Алмаштарҙың һөйләмдәге роле. Алмаш төркөмсәләре. Алмаштарҙың үҙгәреше.

**Кылым**

Һүҙ төркөмө буларак кылым (кабатлау), уның морфологик билдәһе, синтаксик функцияһы. Үҙ аллы һәм ярҙамсы кылымдар. Кылымдың һөйкәлештәре, кылым күләмдәре, рәүешлеге. Кушма кылым.

**Рәүеш**

Һүҙ төркөмө буларак рәүеш (кабатлау).Рәүештең төркөмсәләре.

Рәүештең сифат менән окшаш һәм айырмалы яктары.

Рәүеш дәрәжәләре. Рәүештең яһалышы. Рәүештәрҙең дөрөҫ яҙылышы.

**Синтаксис һәм пунктуация**

**Кушма һөйләм (кабатлау)**

Кушма һөйләмдәр. Кушма һөйләмдәр өлөштәренең мәғәнәүи, структур һәм интонация берҙәмлеге.Кушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.

**Төп дөйөм белем биреү кимәлендә «Туған (башҡорт) тел»**
**уҡыу предметын үҙләштереүҙең планлаштырылған һөҙөмтәләре**

**Шәхсән һөҙөмтәләр**

«Туған (башҡорт) теле»нән программаның шәхсән һөҙөмтәләре төп дөйөм белем биреү өсөн уҡыусыларҙың позитив йүнәлеш ҡиммәттәр системаһына нигеҙләнеүгә әҙер булыуын һәм уның нигеҙендә эшмәкәрлек тәжрибәһен киңәйтеү һәм тәрбиәүи эшмәкәрлектең төп йүнәлешен тормошҡа ашырыу процесында күрһәтергә тейеш, шул иҫәптән:

***гражданлыҡ тәрбиәлә:***

гражданлыҡ бурыстарын үтәргә һәм уның хоҡуҡтарын тормошҡа ашырыуға әҙер булыуын, хоҡуҡтарын, ireклек һәм башҡа кешеләрҙең хоҡуҡи ҡыҙыҡһыныуҙарын хөрмәт итеү;

башҡорт телендә яҙылған әҙәби әҫәрҙәрҙә сағылдырылған ситуациялар менән сағыштырмаса ғаилә, белем биреү ойошма, урындағы берҙәмлек, тыуған яҡ, ил тормошонда актив ҡатнашыу; экстремизм, дискриминацияның теләһә ниндәй формаһын ҡабул итмәү;

кеше тормошонда төрлө социаль институтарҙың ролен аңлау; төп хоҡуҡтар, ireклек һәм гражданиндың бурыстар, социаль нормалар, полимәҙәни һәм күп конфессиональ йәмғиәттәге ҡағиҙәләр тураһында күҙҙаллау, шулай уҡ башҡорт телендә яҙылған әҙәби әҫәрҙәр миҫалы нигеҙендә формалашылғандарын да;

төрлө берҙәм эшмәкәрлеккә әҙерлек, бер-берендe аңлау һәм бер-береңә ярҙам итеүгә ынтылыу;

мәктәп үҙидаралыҡта актив ҡатнашыу; гуманитар эшмәкәрлектә (ярҙамға мохтаж кешеләргә ярҙам итеү; волонтерлыҡ) ҡатнашыуға әҙерлек.

***патриотик тәрбиә:***

полимәҙәни һәм күп конфессиональ йәмғиәттә рәсәй гражданлыҡ берҙәйлекте белеү, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булараҡ башҡорт теленең ролен аңлау;

башҡорт телен үҙләштереүгә, Рәсәй Федерацияһының тарих һәм мәҙәниәтенә, үҙ яғындың мәҙәниәтенә, уҡыу предметы контексындағы Рәсәй халыҡтарына ҡыҙыҡһыныу күрһәтеү;

башҡорт теленә, үҙ республикаңдың уңыштарына, Ватан – Рәсәй, фәнгә, мәҙәниәткә, яу батырлыҡтарына һәм халыҡтың хеҙмәт уңыштарына мөһим мөнәсәбәт;

Рәсәй символдарына, дәүләт байрамдарына, тәбиғәт һәм тарихи мираҫҡа һәм һәйкәлдәргә, тыуған яҡта йәшәгән төрлө халыҡтың традицияларына ихтирам;

***рухи-әхлаҡи тәрбиә:***

әхлаҡи ҡиммәттәргә һәм рухи һайлау ситуацияларындағы нормаларға йүнәлдереү;

үҙ тәртибеңде, шулай уҡ телмәр һәм эш-ҡылыҡтарыңды, шулай уҡ ҡылыҡтарыңың һөҙөмтәһен таныуын иҫәпкә алып рухи һәм хоҡуҡи нормалар позицияһынан башҡа кешеләрҙең ҡылыҡтарын һәм тәртибен баһаларға әҙерлек;

социаль ҡаршылыҡлы ҡылыҡтарҙы ҡабул итмәү; шәхси һәм йәмғиәт киңлектәр шарттарында шәхестең ireклеге һәм яуаплылығы;

***эстетик тәрбиә:***

сәнғәттең төрлө төрҙәрен, традициялар һәм үҙеңдең һәм башҡа халыҡтарҙың ижадын ҡабул итеү;

сәнғәткә эмоциональ тәьҫир итеүҙе аңлау; аралашыу һәм үҙеңде күрһәтеү сараһы

булараҡ әҙәби мәҙәнилектең мөһимлеген аңлау; аралашыу һәм үҙеңде күрһәтеү сараһы булараҡ башҡорт теленең мөһимлеген аңлау;

***физик тәрбиә, һаулыҡ мәҙәниәтен формалаштырыу һәм эмоциональ именлек:***

үҙ тормош һәм уҡыу тәжрибәһенә таянып, йәшәү ҡиммәттәрен аңлау;

үҙеңдең һаулығыңа һәм сәләмәт тормош алып барыуға (сәләмәт аҙыҡ, гигиеник ҡағиҙәләрҙе һаҡлау, эш һәм ял режимын тигеҙләү, физик активлыҡ) күрһәтмә һәм яуаплы мөнәсәбәт; насар ҡылыҡтарҙың (спиртлы эсемлектәр, наркотиктар ҡулланыу, тартыу) физик һәм психик һаулыҡҡа зыян килтереүсе башҡа формаларҙың һөҙөмтәләрен аңлау; хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен, шулай уҡ мәктәптә тел буйынса белем биреү процесында интернет-мөхитендә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре күнекмәләрен һаҡлау;

стресс ситуацияларға һәм социаль, үҙгәреүсе мәғлүмәти һәм тәбиғәт шарттарына, шулай уҡ үҙ тәжрибәңә һәм артабанғы маҡсатты төҙөүгә яраҡлашыу һәләтлеге;

үҙеңде һәм башҡаларҙы тәнҡитләмәй ҡабул итеү;

үҙеңдең эмоциональ хәл торошоңдо һәм башҡаларҙың эмоциональ хәл торошон тоя белеү, үҙеңдең хәл торошоңдо сағылдырыу өсөн тап килгән тел сараларын ҡулланыу, шулай уҡ башҡорт телендә яҙылған әҙәби әҫәрҙәр миҫалына нигеҙләнеп;

***хеҙмәт тәрбиәһе:***

технологик һәм социаль йүнәлешле ғәмәли мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә (ғаилә, мәктәп, ҡала, өлкә сиктәрендә) актив ҡатнашыуға күрһәтмә, ундай йүнәлешле эш төрөн планлаштырыу, инициировать итеү һәләтлеге һәм үҙаллы эшләү;

төрлө төрҙәге эш һәм һөнәрҙе практик өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу, шулай уҡ өйрәнелгән предмет белемен ҡулланыу нигеҙендә һәм филолог, журналист, яҙыусыларҙың эшмәкәрлеге менән таныштырыу;

хеҙмәткә һәм хеҙмәт эшмәкәрлеге һөҙөмтәләренә ихтирам, шәхси һәм йәмғиәт ҡыҙыҡһыныуын һәм ихтыяждарын иҫәпкә алып, белем биреүҙең троекторияһын төҙөү һәм тормош пландарын аңлы рәүештә һайлау;

***экологик тәрбиә:***

тирә-яҡ мөхит өлкәһендәге мәсьәләләрҙе хәл иткәндә тәбиғи һәм социаль ғилем өлкәһендәге белемде ҡулланыуға йүнәлеш, ҡылыҡтарыңды планлаштырыу һәм тирә-яҡ мөхиткә зыян итеүсе һөҙөмтәләрҙе баһалау;

экологик проблемаға ҡарата үҙ ҡарашыңды теүәл һәм эҙмә-эҙлекле сағылдыра белеү;

экологик мәҙәниәт кимәлен күтәреү, глобаль характерҙағы экологик проблеманы таныу һәм уны хәл итеү юлдары;

тирә-яҡ мөхиткә зыян килтереүсе ҡылыҡтарҙы актив ҡабул итмәү, шул иҫәптән экологик проблеманы күтәргән әҙәби әҫәрҙәр менән танышыуҙа формалашҡандарын;

тирә-яҡ мөхиткә зыян килтереүсе ҡылыҡтарҙы актив ҡабул итмәү;

тәбиғәт, технологик һәм социаль мөхит менән бәйләнеш шарттарында гражданин һәм ҡулланыусы булараҡ үҙеңдең ролеңде таныу;

экологик йүнәлешле практик эшмәкәрлектә ҡатнашыуға әҙерлек;

***ғилми белем алыу ҡиммәттәре:***

кеше, тәбиғәт һәм йәмғиәт, тәбиғәт һәм социаль мөхит менән кешенең үҙ-ара бәйләнеше, үҫешенең төп ҡануниәттәре тураһында ғилми күҙалауҙың заманса системаһы эшмәкәрлегенә йүнәлеш;

тел һәм уҡыу мәҙәниәте, донъяны танып белеү сараһы булараҡ уҡыу күнекмәләрен үҙләштереү;

Мәктәптә тел буйынса белем биреү үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, тикшеренеү эшмәкәрлегенең төп күнекмәләрен үҙләштереү; тәжрибә, күҙәтеү, ҡылыҡтарҙы ҡабул итеүгә күрһәтмә һәм шәхсән, коллектив именлегенә өлгәшеү юлдарын камиллаштырыуға ынтылыу;

Социаль һәм тәбиғәт мөхитендәге үҙгәреү шарттарына *уҡыусыларҙың яраҡлашыуын* тәьмин итеүҙә шәхсән һөҙөмтәләр:

уҡыусыларҙың социаль тәжрибәне, төп социаль ролде, норма һәм йәмғиәт тәртип ҡағиҙәләрен, төркөмдә һәм профессиональ эшмәкәрлек буйынса формалашҡан, шулай уҡ башҡа мәҙәни мөхиттәге кешеләр менән социаль бәйләнештә булған, ғаилә, төркөм социаль тормош берлеге формаларын үҙләштереү;

уҡыусыларҙың билдәһеҙлек шарттарында, тәжрибәгә һәм башҡаларҙың белемдәренә асыҡ булыуҙа үҙ-ара тәьҫир итеү һәләтлелеге;

билдәһеҙлек шарттарында эшләү һәләте, практик эшмәкәрлек аша үҙеңдең компетентлыҡ кимәлен күтәреү, шул иҫәбтән башҡа кешеләрҙән уҡырға өйрәнеү, берҙәм эшмәкәрлектә башҡаларҙың тәжрибәһенән сығып, яңы белем, күнекмә һәм компетенция алыу;

образдарҙы асыу һәм бәйләү күнекмәһе, яңы белемде формалаштырыу һәләте, объект һәм күренеш тураһында идея, аңлатма, гипотезаны формалаштырыу һәләте, шул иҫәптән элек билдәле булмағандарын, үҙ белем һәм компетенцияңдың етешмәүен аңлау, үҙ үҫешеңде планлаштырыу;

ныҡлы үҫеш концепцияһы өлкәһендә төп аңлатма, термин һәм күҙ алдына килтереүҙәрҙе ҡуллана белеүе, тәбиғәт, йәмғиәт һәм иҡтисадтың бер-береһенә бәйләнешен анализлау һәм асыу, тирә-яҡ мөхиткә йоғонтоһон иҫәпкә алып, үҙ эшеңде баһалау, маҡсатҡа өлгәшеү һәм ҡаршылыҡтарҙы, мөмкин булған глобаль һөҙөмтәне еңеп сығыу;

стресс ситуацияларҙы аңлау һәләте, тормош, телмәр һәм уҡыу тәжрибәһенә таянып, булған үҙгәреştәрҙе һәм һөҙөмтәне баһалау; стресс ситуацияһын баһалау, ҡабул ителәсәк ҡарар һәм эшмәкәрлекте корректлау; һөҙөмтәне формалаштырыу һәм баһалау, тәжрибәне булдырыу, килеп тыуған ситуацияның ыңғай яҡтарын таба белеү; уңыш гарантияһы булмаған осраҡта эш итергә әҙер булыу.

**Метапредмет һөҙөмтәләр**

универсаль уҡыу **танып-белеү хәрәкәттәрен** үҙләштереү

***Төп логик хәрәкәт:***

тел берәмектәрен, тел күренештәрен һәм процестарҙың булған билдәләрен характерлау һәм асыу;

дөйөмләштереү һәм сағыштырыуға, үткәреләсәк анализ критерияларына нигеҙ булараҡ тел берәмектәре (күренеш) классификацияһының булған билдәләрен ҡуйыу; тел берәмектәренең булған билдәләрен классификациялау;

ҡараласаҡ факт, мәғлүмәт һәм күҙәтеүҙәрҙә ҡапма-ҡаршылыҡты һәм ҡануниәтте асыу; ҡануниәт һәм ҡапма-ҡаршылыҡты асыу өсөн критерийҙар тәҡдим итеү;

ҡуйылған кәрәкле уҡыу мәсьәләһен хәл итеү өсөн мәғлүмәттең етмәүен асыҡлау;

тел процестарын өйрәнеүҙә сәбәп-тикшеренеү бәйләнештәрҙе асыҡлау; дедуктив һәм индуктив һөҙөмтә, аналогия буйынса һөҙөмтә ҡулланып, һығымта эшләү, бер-береһенә бәйләнеш буйынса гипотеза формалаштырыу;

төрлө төрҙәге текстар, төрлө тел берәмектәре менән эшләү барышында, хәл итеү варианттарын сағыштырып һәм үҙаллы билдәләгән критерийҙарҙы иҫәпкә алып, ҡулайлы вариантты һайлап, уҡыу мәсьәләһенең сиселешен үҙаллы һайлау.

***Төп тикшеренеү эшмәкәрлеге:***

тел белемендә һорауҙы белем алыуҙың тикшеренеү инструменты булараҡ ҡулланыу;

ысынбарлыҡ һәм теләгән хәл торош ситуацияһы араһында тап килмәгәнлекте теркәүсе һорауҙы формалаштырыу;

үҙ фекере йөрөтөүендә һәм башҡаларҙың фекеренең дөрөҫлөгө тураһында гипотеза формалаштырыу;

эшмәкәрлектең алгоритмын төҙөү һәм уны уҡыу мәсьәләһен сисеүҙә ҡулланыу;

тел берәмектәренең, процестарҙың, сәбәп-тикшеренеү бәйләнештәрҙең һәм объектарҙың бер-береһенән бойондороҡло булыу үҙенсәлектәрен ҡуйыу буйынса үҙаллы төҙөлгән план буйынса ҙур булмаған тикшеренеү үткәреү;

лингвистик тикшеренеү (эксперимент) барышында алынған мәғлүмәттең ысынбарлыҡҡа тап килеүен һәм ҡулланылышлы булыуын тикшереү;

алып барылған күҙәтеү, тикшеренеү һөҙөмтәләре буйынса дөйөмләштереү һәм һығымтаны үҙаллы формалаштырыу; алынған дөйөмләштереү һәм һығымтаның ысынбарлыҡҡа тап килеүен баһалау инструменттары менән ҡулланыу;

Оҡшаш ситуацияларҙа мөмкин булған артабанғы үҫеш процесын, ваҡиғалар һәм уларҙың һөҙөмтәләрен прогнозлау, шулай уҡ яңы шарттар һәм контекстарҙа уларҙың үҫеше тураһында фараз итеү.

***Мәғлүмәт менән эшләү:***

тәҡдим ителгән уҡыу мәсьәләһен һәм бирелгән критерийҙарҙы иҫәпкә алып, мәғлүмәтте эҙләүҙә һәм һайлауҙа төрлө метод, инструметтарҙы ҡулланыу;

текст, таблица һәм схемала күрһәтелгән мәғлүмәтте һайлау, анализлау,интерпретация биреү, дөйөмләштереү һәм системалаштырыу;

текстағы мәғлүмәттең дөрөҫлөгө һәм ҡулланылышы күҙлегенән баһалау өсөн төрлө төрҙәге аралашыу һәм уҡыуҙы ҡулланыу һәм уҡыу мәсьәләһен хәл итеү маҡсатынан кәрәкле мәғлүмәтте үҙләштереү;

ҡуйылған маҡсаттарҙы иҫәпкә алып, мәғлүмәтте алыу, дөйөмләштереү һәм системалаштырыу өсөн мәғәнәле уҡыуҙы ҡулланыу;

төрлө мәғлүмәти сығанаҡтарҙа тап килгән аргументтарҙы (раҫлаусы йә кире ҡағыусы бер үк идеяны, версияны) табыу;

мәғлүмәтте (текст, презентация, таблица, схема) тәҡдим итеүҙең ҡулайлы формаһын үҙаллы һайлау һәм хәл ителәсәк мәсьәләне ауыр булмаған диаграмма, графика һәм, коммуникатив күрһәтмә бәйләнешендә уның комбинацияларын иллюстрациялау;

уҡытыусы тарафынан тәҡдим ителгән йә үҙаллы аныҡ итеп әйтелгән критериялар буйынса мәғлүмәттең ышаныслылығын баһалау;

Мәғлүмәтте эффектив (файҙалы) иҫтә ҡалдырыу һәм системалаштырыу

универсаль уҡыу **коммуникатив хәрәкәттәрен** үҙләштереү

***Аралашыу:***

фекерҙе ҡабул итеү һәм аныҡ итеп әйтеү, аралашыуҙың шарт һәм маҡсатына ярашлы эмоцияңды белдереү; диалог һәм дискуссияларҙа, телдән монологик телмәрҙә һәм яҙма текстарҙа үҙеңде (үҙеңдең ҡарашыңды) белдереү;

невербаль аралашыу сараларын таныу, социаль тамғаларҙың мәғәнәһен аңлау;

конфликт ситуацияларҙың тәүшарттарын белеү һәм таныу һәм конфликты йомшартыу, һөйләшеү алып барыу;

башҡаларҙың ниәттәрен аңлау, әңгәмәләшеүсеңә ихтирам күрһәтеү һәм корректлы формала үҙеңдең килешимәүеңде аныҡ итеп әйтеү;

диалог/дискуссия барышында мәсьәләләрҙе хәл итеү маҡсатынан һәм аралашыуҙың ыңғай хәл итеүен ҡеүәтләп, тема буйынса һорау биреү һәм үҙ идеяларыңды әйтеү;

диалогта ҡатнашыусыларҙың фекерен фекереҢ менән сағыштырыу, позицияларҙың айырмалы һәм оҡшаш яҡтарын табыу;

үткәрелгән тел анализы, эшләнелгән лингвистик эксперимент, эҙләнеү, проект һөҙөмтәләрен халыҡ алдында тәҡдим итеү;

презентацияның маҡсатын һәм аудиторияның үҙенсәлеген иҫәпкә алып, сығыш форматын үҙаллы һайлау һәм күргәҙмә материалды ҡулланып, уға ярашлы телдән һәм яҙма текст төҙөү.

***Берҙәм эшмәкәрлек:***

тәғәйен проблеманы хәл итеүҙә командала һәм шәхсән эштең өҫтөнлөгөн аңлау һәи ҡулланыу, ҡуйылған мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә төркөм менән эшләү формаһын ҡулланыуҙың кәрәклеген нигеҙләү;

берҙәм эшмәкәрлектең маҡсатын ҡабул итеү, уға өлгәшеү өсөн коллектив менән планлаштырыу һәм хәрәкәтте башҡарыу;

берҙәм эшмәкәрлекте ойоштороуҙы планлаштырыу, үҙеңдең ролеңде (берҙәм эшмәкәрлектә ҡатнашыусыларҙың барыһының да өҫтөнлөктәрен һәм мөмкинлектәрен иҫәпкә алып) билдәләү, команда ағзалары араһында мәсьәләләрҙе бүлеп биреү, төркөм формаһындағы эштә (фекер алышыу, “мейе штурмы” һәм башҡалар) ҡатнашыу;

үҙеңә бүленгән эште башҡарыу, үҙ эшеңдең йүнәлеше буйынса сифатлы һөҙөмтәгә өлгәшеү һәм командалағы башҡа ағзаларҙың эштәре менән үҙ эшеңде тиңләү;

дөйөм һуңғы һөҙөмтәгә һалған өлөшөңдөң сифатын эшмәкәрлектә ҡатнашыусылар үҙаллы аныҡ итеп билдәләгән критерийҙар буйынса баһалау; баштағы мәсьәләнең һөҙөмтәләре һәм һуңғы һөҙөмтәгә өлгәшеү өсөн командалағы һәр ағзаның өлөшөн сағыштырыу һәм төркөм алдында отчет тәҡдим итергә әҙерлекте күрһәтеү.

Универсаль уҡыу **регулятив эшмәкәрлекте** үҙләштереү

***Үҙ ойоштороу:***

уҡыу мәсьәләһе һәм тормош ситуациялары өсөн проблемаларҙы асыу;

хәл итеүҙе ҡабул итеүҙә төрлө йүнәлештәрҙә (шәхсән, төркөмдә хәл итеүҙә) ориентирлашыу;

мәсьәләне сисеүҙә (йә уның өлөшөн) үҙаллы алгоритм төҙөү, булған ресурстарҙы һәм үҙ мөмкинлектәреңде иҫәпкә алып, уҡыу мәсьәләһен сисеүҙең ысулын һайлау, хәл итеүҙең мөмкин булған варианттарын аргументлау;

үҙаллы эшмәкәрлек планын төҙөү, уны тормошҡа ашырыуҙа кәрәкле төҙәтмәләр индереү;

хәл итеүҙә яуаплылыҡты алыу һәм һайлап алыу.

***Үҙ баһалау:***

үҙ контролдең ( шул иҫәптән телмәр) төрлө ысулдарына эйә булыу;

уҡыу ситуацияһына адекват баһа биреү һәм уны үҙгәртеү буйынса план тәҡдим итеү;

уҡыу мәсьәләһен хәл итеүҙә килеп сығыусы ауырлыҡтарҙы күҙаллау һәм уны хәл итеүҙе көйләү;

эшмәкәрлек һөҙөмтәләренә өлгәшеүҙең (өлгәшмәүҙең) сәбәбен аңлатыу; коммуникатив уңышһыҙлыҡтарҙың сәбәбен аңлау һәм уны иҫкәртә белеү, үҙләштерелгән телмәр тәжрибәһенә баһа биреү, маҡсат һәм аралашыу шарттарын иҫәпкә алып, үҙ

телмәреңде корректировкалау.

***Эмоциональ интеллект:***

-үҙ эмоцияң һәм башҡаларҙың эмоцияһы менән идара итеү һәләтен үҙләштереү;

-эмоцияның сәбәптәрен асыу һәм анализлау; телмәр ситуацияһын анализлауҙа башҡа кешенең дәлил һәм ниәттәрен аңлау; үҙ эмоцияларыңды сағылдырыуҙың ысулдарын көйләү.

***Үҙеңде һәм башҡаларҙы ҡабул итеү:***

-башҡа кешенең һәм үҙ фекереңә аңлы ҡарау; үҙеңдең һәм башҡаларҙың хаталаныуға хоҡуғын таныу;

-үҙеңде һәм башҡаларҙы тәнҡитләмәй ҡабул итеү, асыҡлыҡ күрһәтеү;

-тирә-яҡтағы бөтә нәмәне контролдә тотоп булмауҙы аңлау.

**Предмет һөҙөмтәләре**
**5 класс**

*Уҡыусылар белергә тейеш:*

- башҡорт теленең байлығын һәм тасуирлығын аңлау, уны дәлилләүсе миҫалдар килтереү;
- лингвистиканың төп бүлектәрен, төп тел берәмектерен һәм телмәр (өн, морфема, һүҙ, һүҙбәйләнеш, һөйләм) белеү.
- телдән һәм яҙма телмәрҙең, диалог һәм монологтың айырмалыҡтарын характерлау, көндәлек тормоштапрактик – йүнәлешле уҡыу мәсьәләһен хәл итеү барышында телмәр эшмәкәрлеге төрҙәрен иҫәпкә алыу;
- лингвистик темаға (өйрәнелгән кимәлдә) диалог/полилогта һәм тормоштағы күҙәтеүҙәр нигеҙендәге диалогта ҡатнашыу;
- тыңлау төрҙәрен үҙләштереү: һайланма, танышыу, ентекле;
- уҡыу төрҙәрен үҙләштереү : өйрәнеү, танышыу, ҡарап сығыу, эҙләнеү;
- хәҙерге башҡорт әҙәби теле тураһында күҙҙаллай белеү;
- яҡшы һәм дөрөҫ телмәр күрһәткестәре тураһында дөйөм күҙҙаллау;
- орфоэпик һәм акцентологик вариант нормаларын айырыу; орфоэпик нормаларҙың әйтеү нормаларын иҫәпкә алып ҡулланыу;
- исем, сифат, ҡылымдарҙа (өйрәнелгән кимәлдә) баҫымдарҙы айырыу; исем, сифат, ҡылымдарҙа (өйрәнелгән кимәлдә) айырым грамматик нормаларҙа баҫымдарҙың нормаларын һаҡлау;
- синонимдар, антонимдар, омонимдар (өйрәнелгән кимәлдә) ҡулланыу нормаларын һаҡлау; һүҙҙәрҙе уларҙың мәғәнәһе һәм лексик яраҡлашыу ҡағиҙәләренә яраҡлы ҡулланыу;
- типик телмәр хаталарын айырыу; һөйләү телмәрендә телмәр хаталарын табыу һәм төҙәтеү; грамматик нормаларҙы боҙоуға бәйле типик хаталарҙы айырыу; телдән һәм яҙма телмәрҙә грамматик хаталарҙы табыу һәм төҙәтеү;
- рәсми һәм рәсми булмаған телмәр ситуацияларында этикет формаларын һәм мөрәжәғәт итеү формаларын һаҡлау; таныш булмаған кешегә мөрәжәғәт итеүҙә хәҙерге мөрәжәғәт итеү формалары; милли телмәр этикеты нигеҙендә ятыусы аралашыуҙың этикет принциптарын һаҡлау; башҡорт этикетының вербаль (телдән) һәм вербаль булмаған аралашыу манераһын һаҡлау;
- аңлатмалы, орфоэпик һүҙлектәр, синонидар, антонимдар һүҙлеге, грамматик һүҙлектәр, белешмәләр ҡулланыу, шул иҫәптән мультимедийныйҙарҙы ҡулланыу; пунктуациянан орфографик һүҙлектәр һәм белешмәләр ҡулланыу;

- текстың төп билдәләрен таныу; тексты композицион-мәғәнәүи өлөштәргә (абзацтар) бүлеү; һөйләмдәрҙең һәм текст бүлектәренең (һүҙ формаһы, тамырҙаш һүҙҙәр, синонимдар, антонимдар, эйәлек заты алмаштары, һүҙҙәр ҡабатланыуы) бәйләнеү сараларын таныу; алған белемдәрҙе үҙ текстарыңды (телдән һәм яҙма) төҙөүҙә ҡулланыу;
- текстың төп билдәләре буйынса алған белемдәрҙе практикала ҡулланыу;
- тормош һәм уҡыу тәжрибәһенә таянып, текстар төҙөү;
- тыңланған һәм уҡылған текстарҙы мәғлүмәти эшкәртеү күнекмәләрен үҙләштереү: текстың йөкмәткеһен телдән һәм яҙма формала һөйләү маҡсатынан сығып, план (ябай, ҡатмарлы)төҙөү;
- һөйләү телмәре, функциональ стилдәр, матур әҙәбиәт теленең үҙенсәлектәре тураһында дөйөм күҙаллау;
- өндәрҙе характерлау: өн менән хәрефтең айырмалыҡтарын аңлау, өндәр системаһын характерлау;
- фонетик анализ үткәреү;
- фонетика, графика, орфоэпия буйынса белемдәрҙе дөрөҫ әйтеү һәм яҙыу практикаһында ҡулланыу;
- дөрөҫ яҙыу практикаһында орфограмма буйынса белемдәрҙе ҡулланыу (шулай уҡ ь (нәҙек айырыу билдәһе) һәм ъ (ҡатылыҡ айырыу билдәһе) буйынса өйрәнелгәндәрҙе ҡулланыу);
- төрлө ысулдар менән (тамырҙаш һүҙҙәр һайлау, синоним, антоним һүҙҙәр табыу; контекст буйынса һүҙҙең мәғәнәһен табыу, аңлатмалы һүҙлек ярҙамында) һүҙҙең лексик мәғәнәһен аңлатыу;
- бер мәғәнәле һәм күп мәғәнәле һүҙҙәрҙе табыу, тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙе айырыу;
- синоним, антоним, омонимдарҙы таныу; күп мәғәнәле һүҙҙәрҙе һәм омонимдарҙы айырыу; пароним һүҙҙәрҙе дөрөҫ ҡуллана белеү;
- һүҙҙәрҙең тематик төркөмөн характерлау;
- һүҙҙәргә лексик анализ үткәреү (үтелгәндәр кимәлендә). Лексик һүҙлектәр (аңлатмалы һүҙлек, синоним, антоним, омонимдар) һүҙлектәре менән ҡуллана белеү;
- морфеманы телдең минималь берәмеге булараҡ характерлау;
- һүҙҙәрҙә морфемаларҙы таныу;
- һүҙҙәргә морфематик анализ үткәреү;
- һүҙҙең лексик-грамматик разряды булараҡ һүҙ төркөмдәре, һүҙҙең грамматик мәғәнәһе, уҡыу мәсьләһен практик-йүнәлешле хәл итеүҙә башҡорт телендәге һүҙ системаһы тураһында белемдәрҙе ҡулланыу;
- исем, сифат, ҡылымдарҙы таныу;
- исем, өлөшләтә сифаттарға, ҡылымдарға морфологик анализ үткәреү;
- төрлө төрҙәге тел анализы һәм телмәр практикаһында морфология буйынса белемдәрҙе ҡулланыу;
- исем, сифат һәм ҡылымдарҙы дөрөҫ яҙыу нормаларын ҡулланыу;
- дөйөм грамматик мәғәнә, морфологик билдәләрҙе һәм исемдәрҙең синтаксик функцияһын билдәләү; телмәрҙә уның ролен аңлатыу;
- исемдәрҙең лексик-грамматик разрядтарын билдәләү;
- исемдәргә морфологик анализ үткәреү, һүҙ үҙгәреше, исемдәрҙе дөрөҫ әйтеү;
- яңғыҙлыҡ исемдәрҙе, ҡыҫҡартылған исемдәрҙе дөрөҫ яҙыу нормаларын ҡулланыу;

- дөйөм грамматик мәғәнә, морфологик билдәләрҙе һәм сифаттың синтаксик функцияһын билдәләү; телмәрҙә уның ролен аңлатыу;
- сифаттарға (өйрәнелгән кимәлдә) өлөшләтә морфологик анализ яһау;
- өйрәнелгән орфограммалар менән сифаттарҙы дөрөҫ яҙыу нормаларын ҡулланыу;
- ҡылымдың дөйөм грамматик мәғәнәһен, морфологик билдәләре һәм синтаксик функцияларын аңлатыу; ҡылымдарҙың һүҙбәйләнештәрҙә, һөйләмдәрҙә һәм телмәрҙәге ролен аңлатыу;
- ҡылымдарҙы (үткән, хәҙерге, киләсәк) заманда дөрөҫ ҡулланыу;
- ҡылымдарҙы (хәбәр, өндәү, теләк, шарт) һөйкәлешендә дөрөҫ ҡулланыу;
- ҡылымдарҙы өйрәнелгән орфограммалар нигеҙендә дөрөҫ яҙыу нормаларын ҡулланыу;
- синтаксик берәмектәрен (һүҙбәйләнеш һәм һөйләм) таныу; һүҙбәйләнештәргә һәм ябай һөйләмдәргә синтаксик анализ үткәреү; ябай һәм ҡушма һөйләмдәргә (өйрәнелгән кимәлдә) пунктуацион анализ үткәреү; төрлө төрҙәге тел анализдары үткәргәндә һәм телмәр практикаһында синтаксис һәм пунктуация буйынса белемдәрҙе ҡулланыу;
- һүҙбәйләнештәрҙә эйәртеүсе һүҙҙе грамматик билдәләре буйынса таныу; ябай һөйләмдәрҙе; һөйләмдәрҙе әйтелеү маҡсаты (хәбәр, өндәү, һорау) буйынса таныу; эмоциональ төҫмөрө (өндәү, өндәү булмаған), грамматик нигеҙҙең иҫәбе (ябай һәм ҡушма), эйәрсән киҫәктәрҙең булыуы (йыйнаҡ һәм тарҡау) буйынса таныу; баш киҫәктәр (грамматик нигеҙҙе) һәм эйәрсән киҫәктәрҙе билдәләү; һөйләмдә эйәрсән (өйрәнелгән кимәлдә) сағылдырыуҙа морфологик саралар;
- өндәш һүҙҙәрҙе таныу. Өндәш һүҙле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләрен ҡуйыу;
- тиң киҫәкле һөйләмдәрҙә, тиң киҫәкле һөйләмдәрҙә дөйөмләштереүсе һүҙҙәр менән, өндәш һүҙле һөйләмдәрҙә, ҡушма һөйләмдәрҙә пунктуацион нормаларҙы һаҡлау;
- һөйләмдәргә (өйрәнелгән кимәлдә) синтаксик анализ яһау.

**6 класс**

*Уҡыусылар белергә тейеш:*

- Башҡорт телен Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булараҡ функцияһын характерлау;
- башҡорт әҙәби теле тураһында белеү;
- тормошта күҙәтеүҙәр, фәнни-уҡыу-уҡытыу, әҙәби һәм фәнни-популяр әҙәбиәт (монолог-һүрәтләү, монолог-хәбәр итеү, монолог-фекер йөрөтөү) нигеҙендә телдән монологик сығыш булдырыу; лингвистик темаға белдермә менән сығыш яһау;
- диалогта (эшмәкәрлеккә саҡырыу, фекер алышыу) ҡатнашыу;
- исем, сифат, ҡылым (өйрәнелгән кимәлдә) баҫым нормаларын һаҡлау; орфоэпик һәм акцентологик норма варианттарын һаҡлау; хәҙерге орфоэпик норма варианттарын иҫәпкә алып, һүҙҙәрҙе ҡулланыу;
- орфоэпик һәм акцентологик норма варианттарын һаҡлау;
- хәҙерге орфоэпик норма әйтелеш варианттарын иҫәпкә алып, һүҙҙәрҙе ҡулланыу;
- исем, сифат, ҡылым, алмаш, һан, рәүеш, теркәүес, исем ҡылым, сифат ҡылым, уртаҡ ҡылым, хәл ҡылымдарҙы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен (өйрәнелгән кимәлдә) хәҙерге башҡорт әҙәби теле нормаларына яраҡлы телмәрҙә ҡулланыу;
- ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен уларҙы мәғәнәләренә һәм стилистик үҙенсәлектәренә яраҡлы ҡулланыу;
- ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен дөрөҫ яҙыу нормаларын һаҡлау;

- телдән һәм яҙма телмәрҙә типик телмәр хаталарын асыу, анализлау һәм төҙәтеү;
- сит һәм үҙеңдең телмәреңде (өйрәнелгән кимәлдә) хәҙерге башҡорт әҙәби теле нормалары күҙлегенән анализлау һәм баһалау;
- аралашыуҙа башҡорт этикетының вербаль һәм вербаль булмаған манераһын һаҡлау; милли башҡорт телмәр этикеты нигеҙендә ятҡан аралашыу этикет принциптарын һаҡлау; аралашыуҙы башлау һәм тамамлау, маҡтау һәм комплимент әйтеү, рәхмәт белдереү, хуплау, тынысландырыу һ.б.;
- тексты уның төп билдәләренә яраҡлы булыу күҙлегенән анализлау;
- телмәр төрҙәренең функциональ-мәғәнәүи төрҙәге текстарын характерлау; телмәр төрҙәре булараҡ һүрәтләү (кешенең тышҡы ҡиәфәтен, торлаҡты, торған урыныңды, тәбиғәтте, эшмәкәрлекте) үҙенсәлектәрен характерлау;
- текстағы һөйләмдәрҙең бәйләнеш сараларын асыу;
- төрлө төрҙәге анализдар яһағанда һәм телмәр практикаһында телмәр төрҙәренең функциональ-мәғәнәүи тураһындағы белемдәрҙе ҡулланыу; үҙ тексыңды төҙөү практикаһында текстың төп билдәләре белемдәрен ҡулланыу;
- тексҡа мәғәнәүи, уның композицион үҙенсәлектәренә анализ эшләү, микротемаларын һәм абзацтарының иҫәбен билдәләү;
- тексҡа мәғәнәүи, уның композицион үҙенсәлектәренә анализ үткәреү;
- телмәр төрҙәренең төрлө функциональ-мәғәнәүи (хикәйәләү, кешенең тышҡы ҡиәфәтен, торлаҡты, торған урыныңды, тәбиғәтте, эшмәкәрлекте) текстары төҙөү;
- тексты ҡайтанан эшкәртеү күнекмәләрен үҫтереү: уҡылған тексҡа план төҙөү (ябай, ҡатмарлы) артабан тексты телдән һәм яҙма формала йөкмәкеһен һөйләү маҡсаты менән; уҡылған һәм тыңланған текста төп һәм икенсел мәғлүмәтте айырып алыу; төрлө сығанаҡтарҙан, шулай уҡ лингвистик һүҙлектәрҙән һәм белешмәләрҙән мәғлүмәт алыу һәм уны уҡыу-уҡытыу эшмәкәрлегендә ҡулланыу;
- телмәрҙә рәсми эш ҡағыҙҙары стиле, телмәрҙә фәнни стилдең үҙенсәлектәрен характерлау, һүҙлек мәҡәләһе һәм фәнни белдермә төҙөүгә талаптарҙы һанап китеү; телдә төрлө функциональ текстарҙы һәм жанрҙарҙы (хикәйә; ғариза, ышаныс ҡағыҙы; һүҙлек мәҡәләһе, фәнни белдермә) анализлау;
- төрлө төрҙәге тел анализы яһағанда һәм телмәр практикаһында рәсми эш ҡағыҙҙары стиле һәм фәнни стиль тураһындағы белемдәрҙе ҡулланыу;
- һүҙҙәрҙе килеп сығышы яғынан анализлау: төп башҡорт һүҙҙәре һәм үҙләштерелгән һүҙҙәр; актив һәм пассив һүҙлек запасына ҡарауҙары менән айырыу: неологизмдар, иҫкергән һүҙҙәр (историзмдар һәм архаизмдар); һүҙҙәре ҡулланыу сфераһы яғынан айырыу: дөйөм ҡулланылышлы һүҙҙәр һәм ҡулланышы яғынан сикләнгән һүҙҙәр (диалектизмдар, терминдар, профессиональ һүҙҙәр, жаргондар); һүҙҙәрҙең стилистик төҫмәрленештәрен билдәләү;
- текста фразеологизмдарҙы таныу, уларҙың мәғәнәләрен билдәләй белеү; фразеологизмдарҙың ҡулланыу ситуацияһын характерлау;
- ҡанатлы һүҙҙәр һәм афоризмдарҙы билдәләү;
- телмәр ситуацияһына яраҡлы лексик сараларҙы һайлауҙы тормошҡа ашырыу; сит тел һүҙлектәре, иҫкергән һүҙҙәр ҡулланыу; үҙеңдең һәм сит телмәрҙе теүәл, урынлы һәм һүҙ ҡулланыуҙың тасуирлығыкүҙлегенән сығып баһалау; аңлатмалы һүҙлектәр ҡулланыу;
- һүҙҙәрҙә һүҙҙең формаһын һәм һүҙ яһаусы морфемаларҙы таныу;

- һүҙ яһалыу юлдарын билдәләү; һүҙҙәргә морфемик һәм һүҙ яһаусы анализ эшләү; морфемика һәм яһалышы буйынса белемде төрлө төрҙәге тел анализы яһағанда ҡулланыу;
- сифаттарҙың һүҙьяһалыш нормаларын билдәләү;
- өйрәнелгән орфограммаларҙы таныу; һүҙҙәргә орфографик анализ яһау; дөрөҫ яҙыу практикаһында орфография буйынса белемде ҡулланыу;
- ҡушма һәм ҡыҫҡартылған һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙыу нормаларын һаҡлау;
- исемдәрҙә эйәлек заты ялғауҙарының дөрөҫ яҙылышын үҙләштереү; хәбәрлек заты ялғауҙарында баҫымдың үҙенсәлектәрен аңлау;
- төп, артыҡлыҡ, аҙһытыу, сағыштырыу дәрәжәләрен айырыу;
- килеш ялғауҙарын таныу һәм килеш мәғәнәләрен аңлау;
- һандарҙы таныу; һандарҙың төп грамматик мәғәнәләрен билдәләү; һандарҙың мәғәнәләре, төҙөлөшө яғынан төркөмсәләрен айырыу;
- һандарҙы үҙгәртеү һәм үҙенсәлектәрен, синтаксик функцияһын характерлау; телмәрҙә һандарҙың ролен, фәнни мәҡәләләрҙә, эшлекле телмәрҙәуларҙы ҡулланыу үҙенсәлектәрен билдәләү;
- һандарҙы дөрөҫ ҡулланыу; уларҙы дөрөҫ яҙыу нормаларын һаҡлау;
- алмаштарҙы таныу; төп грамматик мәғәнәһен билдәләү; алмаштарҙы үҙгәртә белеү; уларҙы үҙгәртеү үҙенсәлектәрен, синтаксик функцияһын, телмәрҙәге ролен характерлау;
- башҡорт телмәр этикеты талаптарына яраҡлы алмаштарҙы, шул иҫәптән алдағы тексттың мәғәнәһенә яраҡлы (ике төрлө мәғәнәлекте, аңлылышлыҡты булдырмау өсөн) 3-сө заттағы алмашты дөрөҫ ҡулланыу; алмаштарҙы дөрөҫ яҙыу нормаларын һаҡлау;
- ҡылым төркөмсәләрен (исем, сифат, уртаҡ, хәл ҡылымдар) айырыу; ҡылым йүнәлештәрен билдәләү; ҡылым күләмдәре һәм ҡылым рәүешлеген характерлау;
- исем, сифат, уртаҡ, хәл ҡылымдарҙы, рәүеш, ярҙамсы һүҙ төркөмдәре (теркәүес, бәйләүес, киҫәксә, мөнәсәбәт һүҙҙәр, ымлыҡтар, оҡшатыу һүҙҙәрен) таныу һәм морфологик анализ яһау; төп грамматик мәғәнәһен, морфологик билдәләрен, синтаксик функцияларын билдәләү;
- исем ҡылымдың мәғәнәһе һәм яһалышын билдәләү;
- исем ҡылымдың исемгә күсеүен таныу; исемҡылымдың исемгә оҡшаш яҡтары: һан, килеш, эйәлек заты менән үҙгәреүен билдәләү;
- исем ҡылымдарҙың барлыҡ-юҡлыҡ формаһын айырыу;
- исем ҡылымдарҙың һөйләмдәге ролен белеү;
- уртаҡ ҡылымдың мәғәнәһен һәм яһалышын характерлау;
- уртаҡ ҡылымдың юҡлыҡ формаһын һәм синтаксик вазифаларын билдәләү;
- сифат ҡылымды айырым һүҙҙәр төркөмө булараҡ характерлау; сифат ҡылымдарҙың исемләшеүе, уларҙың исем грамматик категорияларын алыуын билдәләү;
- сифат ҡылымдың заман формаларын (үткән заман сифат ҡылым, киләсәк заман сифат ҡылым, хәҙерге заман сифат ҡылым) айырыу, уларҙың һөйләмдәге вазифаларын белеү;
- сифат ҡылымдарға морфологик анализ яһау, күнекмәләрҙе телмәр практикаһында ҡулланыу;
- сифат ҡылымдарҙы телмәрҙә урынлы ҡулланыу;
- хәл ҡылым: уның мәғәнәһен билдәләү; хәл ҡылымдың төрҙәрен билдәләү;
- хәл ҡылымдың һөйләмдә ролен билдәләү;
- телмәрҙә хәл ҡылымды урынлы ҡулланыу;
- хәл ҡылымдар ҡулланып, һөйләм төҙөү;
- хәл ҡылымлы һөйләмдәрҙә тыныш билдәләрен дөрөҫ ҡуйыу;

- телмәрҙә рәүештәрҙе таныу; рәүештең дөйөм грамматик мәғәнәһен билдәләү; мәғәнәһе яғынан рәүеш төркөмсәләрен айырыу; уларҙың синтаксик билдәләрен, телмәрҙәге ролен характерлау.
- рәүештәргә синтаксик анализ үткәреү, был күнекмәләрҙе практикала ҡулланыу:
- ярҙамсы һүҙ төркөмдәренә дөйөм характеристика биреү; уларҙың үҙаллы һүҙ төркөмдәренән айырмалы яҡтарын билдәләү;
- ярҙамсы һүҙ төркөмө булараҡ теркәүестәрҙе характерлау; текста теркәүестәрҙең ролен, шулай уҡ һөйләмдең тиң киҫәктәрен һәм ҡушма һөйләм эсендәге ябай һөйләмдәрҙе үҙ-ара бәйләү сараһы булараҡ аңлатыу;
- теркәүестәрҙең бүленеше: теҙеү һәм эйәртеү теркәүестәрен айырыу;
- теркәүестәрҙең телмәрҙәге функцияһын аңлатыу; уларҙы дөрөҫ яҙыу нормаларын һаҡлау;
- ярҙамсы һүҙ төркөмө булараҡ бәйләүестәрҙе характерлау;
- бәйләүестәрҙең бүленеше: төп һәм эйәлек килеште талап итеүсе бәйләүестәр, төбәү килеште талап итеүсе бәйләүестәр, сығанаҡ килештә ҡулланыусы бәйләүестәрҙе айырыу һәм дөрөҫ ҡулланыу;
- мәғәнәләре һәм стилистик үҙенсәлектәренә ярашлы бәйләүестәрҙе телмәрҙә ҡулланыу;
- киҫәксәләрҙең морфологик билдәләрен, телмәрҙәге, синтаксик вазифаларын билдәләү;
- киҫәксәләрҙең бүленешен (көсәйтеү, раҫлау киҫәксәләре, сикләү киҫәксәләре, икеләнеү киҫәксәләре, һорау киҫәксәләре) айырыу;
- киҫәксәләрҙе дөрөҫ яҙыу нормаларын һаҡлау;
- мөнәсәбәт һүҙҙәрҙең синтаксик ролен билдәләү;
- мөнәсәбәт һүҙҙәрҙең мәғәнәһен һәм телмәрҙә ҡулланышын аңлау;
- телмәрҙә мөнәсәбәт һүҙҙәрҙе дөрөҫ ҡулланыу һәм дөрөҫ яҙыу нормаларын һаҡлау;
- телмәрҙә ымлыҡтарҙың ролен аңлатыу; һөйләү телмәрендә һәм матур әҙәбиәттә ымлыҡтарҙың ҡулланыу үҙенсәлектәрен характерлау;
- ымлыҡтарҙың төрҙәрен айырыу; ымлыҡтарҙы телмәрҙә ҡулланыу һәм дөрөҫ интонация менән уҡырға өйрәтеү; яҙыуҙа тыныш билдәләрен дөрөҫ ҡуйыу.

## 7 класс

*Уҡыусылар белергә тейеш:*

- кеше, дәүләт, йәмғиәт тормошонда туған телдең ролен аңлау;
- тел, мәҙәниәт һәм халыҡ тарихының бәйләнешен аңлау; миҫалдар килтереү;
- хәҙерге башҡорт әҙәби телендә телмәр нормаларын һаҡлау;
- монолог-һүрәтләү, монолог-фекер йөрөтөү, монолог-хикәйәләү төҙөү (ҡабатлау);
- күҙәтеүҙәр, шәхси тәьҫораттар, фәнни-уҡыу-уҡытыу, матур әҙәбиәт һәм фәнни-популяр әҙәбиәт (телдән монолог-һүрәтләү, монолог-фекер йөрөтөү, монолог-хикәйәләү) уҡыу нигеҙендә телдән монологик телмәр төҙөү;
- диалог төрҙәрен (эшмәкәрлеккә әйҙәү, фекер менән уртаҡлашыу, мәғлүмәтте һорау, мәғлүмәтте хәбәр итеү) айырыу;
- һүҙҙәрҙе лексик мәғәнәһе һәм лексик тура килеү талаптарына яраҡлы ҡулланыу; паронимдарҙы ҡулланыу нормаларын һаҡлау;
- типик грамматик хаталарҙы (өйрәнелгән кимәлдә) анализлау һәм айырыу;
- хәҙерге әҙәби телдең төп нормаларын иҫәпкә алып, телдән һәм яҙма телмәрҙе корректлау;
- һүҙҙәрҙе хәҙерге орфоэпик, грамматик һәм стилистик норма варианттарын иҫәпкә алып ҡулланыу;

- үҙенДең телмәрендә хәҙерге башҠорт әҙәби телдең төп лексик нормаларын иҫәпкә алыу (Ҡабатлау);
- хәҙерге башҠорт әҙәби теленең синтаксик нормаларын һаҠлау;
- һүҙбәйләнеш, бер составлы, ике составлы һөйләмдәр, тиң киҫәкле һөйләмдәр, өндәш һүҙҙәр менән һөйләмдәр, инеш һүҙ һәм инеш һөйләмдәр менән һөйләмдәр, айырымланған киҫәктәр менән һөйләмдәрҙе төҙөүҙең төп нормаларын аңлау;
- милли башҠорт телмәр этикеты (тупаҫ һүҙҙәрҙе, аңлатма, фразаларҙы Ҡулланыуҙы тыйыу; һөйләшеүҙә Ҡәтғилекте Ҡулланмау һ.б.) нигеҙендә ятыусы аралашыу этикеты принциптарын Ҡулланыу;
- кешенең һәм үҙеңдең телмәреңде хәҙерге башҠорт әҙәби теле нормалары күҙлегенән анализлау һәм баһалау;
- аңлатмалы, орфоэпик, синоним, антоним; грамматик һүҙлек һәм белешмәләр, шулай иҫәптән мультимедийныйҙарҙы Ҡулланыу; пунктуация буйынса орфографик һүҙлектәр һәм белешмәләр Ҡулланыу;
- тексты төп билдәләренә ярашлы булыу күҙлегенән анализлау; уның структураһын, абзацтарҙың бәйләнеш үҙенсәлектәрен, текстағы тел-һүрәтләү сараларын билдәләү;
- тексты Ҡайтанан эшкәртеү күнекмәләрен үҙләштереү: уҠылған тексҠа план төҙөү (ябай, Ҡатмарлы) артабан тексты телдән һәм яҙма формала йөкмәкеһен һөйләү маҠсаты менән; уҠылған һәм тыңланған текста төп һәм икенсел мәғлүмәтте айырып алыу; текст йөкмәткеһен һөйләү; тексты мәғлүмәти эшкәртеү сараларын Ҡулланыу; төрлө сығанаҠтарҙан, шулай уҠ лингвистик һүҙлектәрҙән һәм белешмәләрҙән мәғлүмәт алыу һәм уны уҠыу-уҠытыу эшмәкәрлегендә Ҡулланыу;
- публицистик стилдең үҙенсәлектәрен характерлау (шул иҫәптән Ҡулланыу, функцияһы), публицистик стилдә тел-һүрәтләү сараларының Ҡулланыуы, публицистик стиль текстарының төҙөлөү нормаларын, жанр (интервью, репортаж, ҠыҫҠа мәҠәләләр) үҙенсәлектәрен ҠылыҠһырлау;
- репортаж, ҠыҫҠа мәҠәләләр, интервью; эшлекле Ҡағыҙҙар (күрһәтмә) жанрында публицистик стиль текстары төҙөү;
- публицистик стиль текстарын төҙөү нормаларын үҙләштереү;
- рәсми эш Ҡағыҙҙары стилен (шул иҫәптән Ҡулланыу, функция, тел үҙенсәлектәре), күрһәтмәнең (инструкция) жанр үҙенсәлектәрен характерлау;
- төрлө төрҙәге тел анализдарын яһағанда һәм телмәр практикаһында телдең функциональ төрлөлөгө тураһында белемдәрен Ҡулланыу;
- лингвистика бүлеге булараҠ синтаксис тураһында аңлатма;
- синтаксис берәмеге булараҠ һүҙбәйләнеш һәм һөйләмде таныу (Ҡабатлау);
- өйрәнелгән тыныш билдәләренең функцияларын айырыу;
- һүҙбәйләнеш, уның һөйләмдән айырмаһын билдәләү;
- һүҙбәйләнештәрҙең яһалыу юлдарын үҙләштереү; эйәртеүле бәйләнеш төрҙәрен: ярашыу, башҠарылыу, йәнәшәлек, һөйкәлеүҙе айырыу;
- һүҙбәйләнештәрҙе фразеологик берәмектәр менән сағыштырыу, улар араһындағы айырманы таныу;
- телмәр практикаһында һүҙбәйләнештәрҙе төҙөү нормаһын Ҡулланыу;
- һөйләмдең төп билдәләрен, телдән һәм яҙма телмәрҙә һөйләмдәрҙе төҙөү сараларын характерлау;

- әйтелеү маҡсаты, эмоциональ биҙәлеше буйынса һөйләмдәрҙе таныу; уның интонацион һәм мәғәнәүи үҙенсәлектәрен характерлау (ҡабатлау);
- һөйләмдә грамматик нигеҙҙең иҫәбе буйынса таныу;эйәне сағылдырыу ысулдары, хәбәр төрҙәре һәм уны сағылдырыу ысулдарын таныу; ябай һөйләү төҙөү нормаларын ҡулланыу; эйә менән хәбәрҙең яраҡлашыу нормаларын ҡулланыу; эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ ҡулланыу нормаларын ҡулланыу;
- һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре барлығы, тулы һәм кәм һөйләмдәр (кәм һөйләмдәрҙең диалогик телмәрҙә ҡулланыу үҙенсәлектәрен аңлау) яғынан таныу;
- һөйләмдә эйәрсән киҫәктәрҙең төрҙәрен (тиң һәм тиң булмаған аныҡлаусылар, өҫтәлмәлек, тура һәм ситләтелгән тултырыусы, хәлдәрҙең төрҙәре: ваҡыт, урын, сәбәп, маҡсат, рәүеш, шарт, күләм-дәрәжә, кире) айырыу;
- һөйләмдәрҙә грамматик нигеҙҙәрҙең һаны буйынса айырыу; эйәне сағылдырыу ысулдары, хәбәр төрҙәре һәм уны сағылдырыу ысулдарын таныу;
- бер составлы һөйләмдәрҙе, уларҙың грамматик билдәләрен; бер составлы һөйләмдәрҙең төрҙәрен (билдәле эйәле һөйләм, билдәһеҙ эйәле һөйләм, эйәһеҙ һөйләм, атама һөйләм) таныу; телмәрҙә бер составлы һөйләмдәрҙе ҡулланыу үҙенсәлектәрен айырыу;
- тиң киҫәкле һөйләмдәр араһында тыныш билдәләрен дөрөҫ ҡулланыу;
- дөйөмләштереүсе һүҙҙәре булған тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе айырыу, дөрөҫ интонация менән уҡыу;
- тиң киҫәкле һөйләмдәрҙең үҙенсәлектәрен билдәләү; тиң һәм тиң булмаған аныҡлаусыларҙы айырыу; тиң киҫәктәр эргәһендә дөйөмләштереүсе һүҙҙе табыу; телмәрҙә тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе ҡулланыу үҙенсәлектәрен аңлау;
- тиң киҫәкле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре ҡуйылыу нормаларын, дөйөмләштереүсе һүҙҙәре булған тиң киҫәкле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре ҡуйылыу нормаларын ҡулланыу;
- инеш һүҙҙәр һәм инеш һөйләмдәрҙе айырыу, телмәрҙә өндәш һүҙҙәр ҡулланылған һөйләмдәрҙең үҙенсәлектәрен аңлау;
- инеш һүҙҙәр һәм инеш һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре ҡулланыу нормаларын белеү;
- телмәрҙә инеш һүҙҙәр һәм инеш һөйләмдәрҙе ҡулланыу һәм уларҙың функцияларын аңлау;
- инеш һүҙҙәр һәм инеш һөйләмдәр төҙөү нормаларын ҡулланыу;
- һөйләмдең айырымланған киҫәктәренең төрҙәрен (өҫтәлмәлектәрҙең айырымланыуы, аныҡлаусыларҙың айырымланыуы, хәл әйтемдәренең айырымланыуы) айырыу һәм тыныш билдәләрен дөрөҫ ҡуйыу;
- тура телмәрле һәм ситләтелгән телмәрле (өйрәнелгән кимәлдә) ҡушма һөйләмдәрҙе таныу;
- тура телмәрле һәм ситләтелгән телмәрле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләрен дөрөҫ ҡуйыу.

**8 класс**

*Уҡыусылар белергә тейеш:*

- төрки телдәренең береһе булараҡ башҡорт теле тураһында белеү;
- тормош күҙәтеүҙәре, шәхси тәьҫораттар, әҙәби, фәнни-популяр һәм публицистик әҙәбиәт (монолог-һүрәтләү, монолог- фекер йөрөтөү, монолог – хикәйәләү) нигеҙендә телдән монолог төҙөү;
- тыңланған һәм уҡылған фәнни-уҡыу-уҡытыу, әҙәби, публицистик текстарҙың йөкмәткеһен аңлау; телдән һәм яҙма формала уҡылған һәм тыңланған текстарҙың ҡыҫҡартып һәм һайлап алып йөкмәткеһен һөйләү;

- үҙ фекереңде әйтеп еткереү өсөн маҡсат, тема һәм коммуникатив ниәттәреңә тап килеү маҡсатынан сығып, тел сараларын һайлау;
- орфоэпик һәм акцентологик норма варианттарын айырыу; хәҙерге орфоэпик нормаларҙың әйтелеш һәм стилистик варианттарын иҫәпкә алып, һүҙҙәрҙе ҡулланыу;
- хәҙерге башҡорт теленең әйтелеш һәм баҫым (өйрәнелгән кимәлдә) өлкәһендәге актив процестар тураһында күҙҙаллау;
- фәнни стиль текстарында, публицистик һәм әҙәби текстарҙа (өйрәнелгән кимәлдә) терминдарҙы әҙәпле ҡулланыу;
- терминдарҙы (өйрәнелгән кимәлдә) ҡулланыуға бәйле типик телмәр хаталарҙы анализлау;
- үҙеңдең һәм башҡа кешенең телмәрен хәҙерге башҡорт әҙәби тел нормалары күҙлегенән сығып анализлау; телмәрҙе хәҙерге әҙәби телдең төп нормаларын иҫәпкә алып төҙәтеү;
- һөйләмдәрҙе синтаксик грамматик хаталарҙы төҙәтеү маҡсатынан редакторлау;
- телмәрҙә теҙмә, эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе ҡулланыу үҙенсәлектәрен аңлау;
- теҙмә һәм эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе төҙөүҙең төп нормаларын аңлау;
- интернет мөхитендә аралашыуҙа милли башҡорт телмәр этикеты нигеҙендә ятҡан этикет формуларын, этикет аралашыу принциптарын ҡулланыу; эшлекле аралашыу ситуацияларында башҡорт этикет телмәр нормаларын һаҡлау;
- телмәр этикетында (өйрәнелгән кимәлдә) актив процестарҙы характерлау һәм баһалау; телмәр агрессияһына ҡаршы торорға ярҙам итеүсе алымдарҙы ҡулланыу;
- аңлатмалы, орфоэпик һүҙлектәр, синоним, антоним һүҙлектәре, грамматик һүҙлек һәм белешмәләр, шулай уҡ мультимедийныйҙарҙы, пунктуация буйынса орфографик һүҙлектәр һәм белешмәләр ҡулланыу;
- тексты төп билдәләренә ярашлы булыу күҙлегенән анализлау: теманың булыуы, төп фекер, һөйләмдәрҙә грамматик бәйләнеш, тулылыҡ һәм тамамланыуы; текста һөйләмдәрҙе бәйләү саралары һәм ысулдарын күрһәтеү; тексты телмәрҙең функциональ – мәғәнәүи төрөнә ҡарағанлығы күҙлегенән анализлау; текста тел сараларының тәьҫирлелеген анализлау;
- телмәр төрҙәрендәге төрлө функциональ-мәғәнәүи текстарҙы (хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү) таныу (ҡабатлау): төрлө функциональ тел һәм жанр төрлөлөгөндәге текстарҙы анализлау; төрлө төрҙәге тел анализдарын яһағанда һәм телмәр практикаһында алынғанбелемдәрҙе ҡулланыу;
- тексты ҡайтанан эшкәртеү күнекмәләрен үҙләштереү: тезис, конспект төҙөү; төрлө сығанаҡтарҙан, шулай уҡ лингвистик һүҙлектәрҙән һәм белешмәләрҙән мәғлүмәт алыу һәм уны уҡыу-уҡытыу эшмәкәрлегендә ҡулланыу. Бирелгән тема буйынса белдермәне презентация формаһында тәҡдим итеү;
- рәсми эш ҡағыҙҙары стиленең (ғариза, аңлатма яҙыу, автобиография, характеристика) һәм фәнни стилдең, фәнни стилдең төп жанрҙарын (реферат, фәнни темаға доклад) үҙенсәлектәрен характерлау; текста телдең төрлө фукциональ төрлөлөгөнөң бәйләнешен, текстағы һөйләмдәрҙең бәйләнеш сараларын асыу;
- рәсми эш ҡағыҙҙары (ғариза, аңлатма яҙыу, автобиография, характеристика), публицистик жанр текстары төҙөү; эш ҡағыҙҙарын яҙыу;
- ҡушма һөйләм төрҙәрен классификациялау;
- ҡушма һөйләм өлөштәре араһындағы синтаксик бәйләнештең төп сараларын асыҡлау;
- төрлө төрҙәге бәйләнешле ҡушма һөйләмдәрҙе таныу;

- теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе, унығ төҙөлөшө, структур һәм өлөштәрҙең интонацион берҙәмлеген характерлау;
- теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙең өлөштәре араһында мәғәнәүи мөнәсәбәтте һәм интонацион үҙенсәлектәрен асыҡлау;
- телмәрҙә теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе ҡулланыу үҙенсәлектәрен аңлау;
- теҙмә ҡушма һөйләмдәр төҙөлөшөнөң төп нормаларын аңлау;
- теҙмә ҡушма һөйләмдәргә синтаксик һәм пунктуацион анализ үткәреү;
- теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре ҡуйылышы нормаларын ҡулланыу;
- эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе таныу, баш һәм эйәрсән һөйләмдәрен, һөйләмдәр араһындағы бәйләнеү сараларын айырыу;
- эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе төрҙәрен айырыу, уларҙың төҙөлөү үҙенсәлектәрен асыҡлау;
- эйәртеүле ҡушма һөйләмдә эйәрсән һөйләмдәрҙе (эйә эйәрсән һөйләм, хәбәр эйәрсән һөйләм, аныҡлаусы эйәрсән һөйләм, тултырыусы эйәрсән һөйләм, ваҡыт эйәрсән һөйләм, урын һөйләм, сәбәп һөйләм, маҡсат һөйләм, рәүеш һөйләм, күләм-дәрәжә һөйләм, сағыштырыу һөйләм, шарт һөйләм, кире һөйләм) таныу.
- эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе телмәрҙә ҡулланыу. Эйәрсән һөйләм төрҙәрен, уларҙың үҙенсәлектәрен, уларҙағы тыныш билдәләрен, компоненттарының бер-береһе менән бәйләнеү сараларын үҙләштереү;
- эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙең төҙөлөшөнөң төп нормаларын, телмәрҙә эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе ҡулланыу үҙенсәлектәрен аңлау;
- эйәртеүле ҡушма һөйләмдәргә синтаксик һәм пунктуацион анализ үткәреү;
- эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙең төҙөлөү нормаларын һәм уларҙа тыныш билдәләренең ҡуйылышын ҡулланыу;
- теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙең өлөштәре араһындағы мәғәнәүи мөнәсәбәтте, был мөнәсәбәттәрҙең интонацион һәм пунктуацион сағылдырыуын характерлау;
- теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙең төҙөлөшөнөң төп грамматик нормаларын, телмәрҙә теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙең ҡулланыу үҙенсәлектәрен аңлау;
- теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең ҡуйылыу нормаларын ҡулланыу;
- теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәргә синтаксик һәм пунктуацион анализ үткәреү;
- күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрҙең төп үҙенсәлектәрен, эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙән айырмаһын төшөнөү;
- күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрҙең төҙөлөшөнөң төп грамматик нормаларын, телмәрҙә күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрҙең ҡулланыу үҙенсәлектәрен аңлау;
- ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙе айырырға өйрәнеү, уларҙың үҙенсәлектәрен билдәләү;
- ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең ҡуйылышын үҙләштереү һәм яҙыуҙа дөрөҫ ҡулланыу;
- теҙемдәрҙең үҙенсәлектәрен белеү, уларҙы айырырға өйрәнеү.

**9 класс**

*Уҡыусылар белергә тейеш:*

- телде үҫә барыусы ижтимағи күренеш (өйрәнелгән кимәлдә) булараҡ характерлау;
- башҡорт теле – башҡорт халҡының милли теле булыуын аңлау;
- башҡорт теленең башҡа ҡәрҙәш телдәр араһындағы урынын билдәләү;
- әҙәби тел менән диалект араһындағы айырмалыҡтарҙы билдәләү һәм характерлау;

- диалекттарҙың милли-мәҙәни төрлөлөгөн (өйрәнелгән кимәлдә) аңлатыу;
- предмет һәм тирә-яҡ күренештәрҙәге атамаларҙы әҙәби телдә һәм диалектта сағыштырыу, диалект һүҙҙәрҙе әҙәбиәттә ҡулланыуҙы аңлатыу;
- күҙәтеүҙәр, шәхси тәьҫораттар нигеҙендә, фәнни-уҡыу-уҡытыу, әҙәби һәм фәнни-популяр әҙәбиәт уҡыу: монолог-хәбәр итеү, монолог-тасуирлау, монолог-фекер йөрөтөү, монолог-хикәйәләү телдән монолог төҙөү; фәнни белдермә менән сығыш яһау;
- көн-күреш, фәнни-уҡыу-уҡытыу (шулай иҫәптән лингвистик) темаларға диалогик һәм полилогик аралашыуҙа (эшмәкәрлеккә өндәү, фекерҙәр менән алышыу, мәғлүмәт алыу, мәғлүмәтте хәбәр итеү) ҡатнашыу;
- сығышыңды маҡсат, тема һәм коммуникатив ниәтеңә яраҡлы ҡороу өсөн тел сараларын һайлауҙы тормошҡа ашырыу;
- әйтелеш һәм баҫым өлкәһендә (өйрәнелгән кимәлдә) актив процестарҙы аңлау һәм характерлау (ҡабатлау);
- орфоэпик һәм акцентологик норма варианттарын айырыу; үҙаллы һүҙ төркөмдәренең (өйрәнелгән кимәлдә) айырым грамматик формаларында әйтелеш һәм баҫым нормаларын һаҡлау; хәҙерге орфоэпик нормаларҙың әйтелеш варианттарын иҫәпкә алып, һүҙҙәрҙе ҡулланыу;
- һүҙҙәрҙе уларҙың лексик мәғәнәләренә яраҡлы ҡулланыу; йыш ҡына осрап торған тавтология күренештәрен таныу;
- публицистик, фәнни, йәнле һөйләү, матур әҙәбиәт, рәсми эш ҡағыҙҙары стилендә терминдарҙы айырыу;
- хәҙерге башҡорт әҙәби теленең синтаксик нормаларын һаҡлау: һүҙбәйләнештәр төҙөү, ябай һөйләмдәр, төрлө төрҙәге һүҙбәйләнештәр төҙөү(ҡабатлау);
- үҙеңдең һәм сит кешенең телмәрен хәҙерге башҡорт әҙәби тел нормалары варианттары нормалары күҙлегенән анализлау һәм баһалау; хәҙерге әҙәби тел вариант нормалары һәм уның төп нормаларға тап килеүен иҫәпкә алып, телмәрҙе төҙәтеү;
- интернет-мөхиттә аралашыу барышында милли башҡорт телмәр этикет нигеҙендә ятыусы, этикет формаларын һәм нығынған формаларҙы, этикет аралашыу принцибын ҡулланыу; эшлекле аралашыу ситуацияларында башҡорт телмәр этикетының нормаларын һаҡлау;
- текстың төп билдәләрен таныу; тексты композицион-мәғәнәүи (абзац) өлөштәргә бүлеү; һөйләмдәрҙең һәм текст өлөштәренең (һүҙ формаһы, тамырҙаш һүҙҙәр, синонимдар, антонимдар, эйәлек заты алмаштары, һүҙҙәр ҡабатланышы) бәйләнеү сараларын таныу; үҙ тексыңды (телдән һәм яҙма) төҙөүҙә уларҙы ҡулланыу;
- телмәрҙең төрлө функциональ-мәғәнәүи текстарын таныу: (хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү) (ҡабатлау); төрлө тел һәм жанр функциональ төрлөлөгөндәге текстарҙы анализлау; ул белемдәрҙе төрлө төрҙәге тел анализдары башҡарғанда һәм телмәр практикаһында ҡулланыу;
- тексты мәғлүмәти ҡайтанан эшкәртеү күнекмәләрен үҙләштереү: текста төп һәм икенсел мәғлүмәтте билдәләү; төрлө сығанаҡтарҙан, шул иҫәптән лингвистик һүҙлектәрҙән һәм белешмә әҙәбиәттән мәғлүмәт алыу һәм уларҙы уҡыу-уҡытыу эшмәкәрлегендә ҡулланыу;
- презентация төрөндә тейешле темаға сығыш тәҡдим итеү; уҡылған һәм тыңланған тексты таблица, схема формаһында тәҡдим итеү; таблица, схема йөкмәткеһен текст төрөндә тәҡдим итеү;

- фәнни стилгә хас булған ҡулланыу өлкәһен, функцияһын, аралашыу телмәренең типик ситуацияһын, телмәр бурыстарын, тел сараларын характерлау; матур әҙәбиәт теленең төп үҙенсәлектәре; һөйләү теленең һәм әҙәби әҫәрҙең төрлө функциональ стилдә яраҡлашыу үҙенсәлектәрен билдәләү;
- үҙ тексыңды төҙөүҙә, телмәрҙең төрлө функциональ-мәғәнәүи төрөнә, телдең функциональ төрлөлөгөнә, тезис, конспект төҙөү нормаһына, реферат яҙыуға ҡараған текст төҙөү нормаларын ҡулланыу;
- тезис, конспект төҙөү, рецензия, реферат яҙыу;
- сит кешеләрҙең һәм үҙеңдең төрлө функциональ йүнәлешле сығыштарыңды коммуникатив талаптарға һәм тел дөрөҫлөгөнә тап килеү күҙлегенән сығып баһалау; тексты редакторлау;
- матур әҙәбиәт теленең башҡа функциональ стилдәр менән сағыштырмаса айырма үҙенсәлектәрен асыу;
- һүҙҙә телмәр өнөнөң мәғәнә айырмалыҡ функцияһын аңлау; һүҙҙең өн составын билдәләү (ҡабатлау);
- өндәрҙе бирелгән билдәләре буйынса классификациялау;
- баҫымлы һәм баҫымһыҙ һуҙынҡыларҙы, яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларҙы, ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡыларҙы айырыу;
- транскрипция элементтары ярҙамында һүҙҙәрҙең әйтелеш һәм яҙылыу үҙенсәлектәрен аңлатыу;
- һүҙҙәрҙең өн һәм хәреф составын сағыштырыу;
- һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлеү һәм юлдан юлға күсереүҙе айырыу;
- һүҙҙең лексик мәғәнәһен төрлө ысулдар менән аңлатыу; бер мәғәнәле һәм күп мәғәнәле һүҙҙәрҙе таныу, тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙе таныу;
- бирелгән билдә буйынса һүҙҙәрҙең тура һәм күсмә мәғәнәһен сағыштырыу; синонимдар, антонимдар, омонимдарҙы таныу; күп мәғәнәле һүҙҙәрҙе һәм омонимдарҙы айырыу (йомғаҡлау);
- һүҙгә лексик анализ яһау; төрлө төрҙәге лексик һүҙлектәрҙә (аңлатмалы һүҙлек, синоним, антоним, омоним һүҙлектәр) кәрәкле мәғлүмәтте табыу һәм уларҙы ҡулланыу;
- һүҙҙең грамматик мәғәнә үҙенсәлектәрен лексик мәғәнәнән айырмалы анализлау һәм характерлау;
- үҙаллы һүҙ төркөмдәрен һәм уларҙың формаларын (өйрәнелгән кимәлдә) таныу;
- һүҙҙең лексик-грамматик разряды булараҡ, һүҙҙең грамматик мәғәнәһе, практик-йүнәлешле уҡыу мәсьәләһен хәл итеүҙә башҡорт телендәге һүҙ төркөмдәре системаһы тураһында белемдәрҙе ҡулланыу;һүҙ төркөмдәрен таныу (ҡабатлау);
- морфология буйынса белемдәрҙе төрлө төрҙәге тел анализдары яһағанда ҡулланыу;
- һүҙҙәрҙең лексик-грамматик бүлеге булараҡ һүҙ төркөмдәре, һүҙҙең грамматик мәғәнәһе, уҡыу мәсьәләләрен практик-йүнәлешле хәл итеүҙә башҡорт телендәге һүҙ төркөмдәре системаһы тураһында алған белемдәрен ҡулланыу.
- төрлө төрҙәге тел анализдарын башҡарғанда һәм телмәр практикаһында морфология буйынса алған белемдәрен ҡулланыу;
- лингвистика бүлеге булараҡ синтаксис тураһында күҙаллай белеү (ҡабатлау);
- морфологик билдәләре буйынса һүҙбәйләнеште (ярашыу, башҡарылыу, йәнәшәлек, һөйкәлеү) таныу;
- һүҙбәйләнештәр менән ҡушма һүҙҙәр араһындағы айырмаларҙы таныу;

- Һүҙбәйләнештәргә синтаксик анализ яһау;
- һөйләмдең төп билдәләрен, телдән һәм яҙма телмәрҙә һөйләмде биҙәү сараларының төп билдәләрен характерлау;
- тыныш билдәләренең функцияһын билдәләү;
- һөйләмдәргә синтаксик һәм пунктуацион анализ үткәреү; төрлө төрҙәге тел анализы башҡарғанда һәм телмәр практикаһында синтаксис буйынса белемдәрен ҡулланыу.

**Тематик планлаштырыу**

**5 КЛАСС (68 СӘҒӘТ)**

| Тематик блок, тема | Төп йөкмәтке | Уҡыусыларэшмәкәрлегенең төп төрҙәре |
|---|---|---|
| ТЕЛ ТУРАҺЫНДА ДӨЙӨМ ТӨШӨНСӘ (1 сәғәт) | | |
| Лингвистика тел тураһында фән. Башҡорт теленең байлығы һәм тасуирлығы (1 с.) | Башҡорт теленең байлығы һәм тасуирлығы. Лингвистика тел тураһындағы фән. Башҡорт теленең лексик һәм фразеологик байлығы (киң һүҙлек байлығы, күп мәғәнәле һүҙҙәрҙең булыуы, һүҙҙәрҙең күсмә мәғәнә системаһының үҫеше, нығынған һүҙбәйләнештәр, мәҡәл һәм әйтемдәр) | Һүҙҙең лексик мәғәнәһен төрлө ысулдар менән аңлатыу. Бер һәм күп мәғәнәле, тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙе ҡапма-ҡаршы ҡуйыу; синонимик рәттәрҙә доминанта; антоним һәм омонимдарҙы парҙарҙа табыу. Фразеологияның төп аңлатмаларын аңлау. Фразеологик берәмектәрҙең билдәләренә ҡарап таныу. Фразеологик берәмектәрҙе айыра белеү. Телмәрҙә уларҙы урынлы ҡулланыу. Телмәрҙә һүрәтләү сараларын һәм фразеологизмдар ҡулланыуҙы күҙәтеү. |
| ТЕЛ ҺӘМ ТЕЛМӘР (2 сәғәт) | | |
| Тел һәм телмәр. Телдән һәм яҙма, диалогик, монологик, телмәр, полилог (2 с.) | Телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре (һөйләү, тыңлау, уҡыу, яҙыу), уларҙың үҙенсәлектәре. Тормоштағы күҙәтеүҙәр, фәнни, әҙәби һәм фәнни-популяр әҙәбиәт һәм уҡыу нигеҙендә телдән монологик телмәр ҡороу. Уҡылған йә тыңланған тексты телдән һөйләү. Лингвистик темаға (өйрәнгәндәр нигеҙендә) һәм тормош күҙәтеүҙәре нигеҙендәге темаларҙағы диалогта ҡатнашыу. Аудирования төрҙәре: һайлау, танышыу, ентекле. Уҡыу | Тормош күҙәтеү, сәнғәтле һәм ғилми-популяр әҙәбиәтте уҡыу нигеҙендә телдән монологик фекереңде әйтеп биреү. Лингвистик темаға диалогта ҡатнашыу һәм тормош күҙәтеүҙәре нигеҙендә диалог/полилог төҙөү. Уҡылған һәм тыңланған текстың төп фекере буйынса телдән һәм яҙма теманы формулировкалау һәм уларға яуап биреү. Тормош һәм уҡыу тәжрибәһенә нигеҙләнеп төрлө төрҙәге инша яҙыу |

| | | |
|---|---|---|
| | төрҙәре: өйрәнеү, танышыу, ҡарап сығыу, эҙләнеү | |
| ТЕЛМӘР МӘҘӘНИӘТЕ (5 сәғәт) | | |
| Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең төп орфоэпик нормалары (1 с.) | Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең төп орфоэпик нормалары. Дөрөҫ әйтеү нормалары. Орфоэпик һүҙлектәрҙә тыйылған билдәләр. Һүҙ мәғәнәһенең маркеры булараҡ баҫым. Орфоэпик норманың әйтелеш варианттары. Һүҙбәйләнеш кимәлендәге әйтелеш варианттары | Орфоэпик һәм акцентологик вариант нормаларын айырыу; орфоэпик нормаларҙың әйтеү нормаларын иҫәпкә алып ҡулланыу. Исем, сифат, ҡылымдарҙа (өйрәнелгән кимәлдә) баҫымдарҙы айырыу. Аңлатмалы, орфоэпик һүҙлектәр, пунктуациянан орфографик һүҙлектәр һәм белешмәләр ҡулланыу. |
| Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең төп лексик нормалары (2 с.) | Һүҙ ҡулланыуҙың төп нормалары: һүҙҙе дөрөҫ һайлау, билдәләнгән предметҡа йә ысынбарлыҡ күренештәренә максималь тап килеүе. Хәҙерге башҡорт әҙәби телендә исем, сифат, ҡылымдың ҡулланыуҙың лексик нормалары. Телмәрҙә исем, сифат, ҡылымдарҙы ҡулланыуҙың лексик нормалары стилистик вариантта (китап, дөйөм ҡулланыш, аралашыу һәм ябай телдә). Синоним, антоним, омонимдарҙы ҡулланыуҙа лексик нормалар. Хәҙерге башҡорт әҙәби телендә исем, сифат, ҡылымдың ҡулланыуҙың лексик нормаларҙы боҙоуҙың типик миҫалдары | Һүҙҙәрҙе лексик мәғәнәһенә яраҡлы ҡулланыу. Исем, сифат, ҡылымдарҙы хәҙерге башҡорт теленең стилистик нормаларын иҫәпкә алып ҡулланыу. Хәҙерге башҡорт әҙәби телендә исем, сифат, ҡылымдың ҡулланыуҙың лексик нормаларҙы боҙоуҙың типик миҫалдарҙы ҡулланыуҙы аңлатыу. Синонимдар, антонимдар, омонимдар (өйрәнелгән кимәлдә) ҡулланыу нормаларын һаҡлау. Синоним, антоним, омонимдарҙы таныу; күп мәғәнәле һүҙҙәрҙе һәм омонимдарҙы айырыу; синонидар, антонимдар һүҙлеге, грамматик һүҙлектәр, белешмәләр ҡулланыу, шул иҫәптән мультимедийныйҙарҙы ҡулланыу |
| Телмәр этикет ҡағиҙәләре: нормалары һәм традициялары (2 с.) | Аралашыуҙа телмәр этикетының нығынған формалары. Башҡорт телмәр этикетында мөрәжәғәт итеү. Башҡорт телендә мөрәжәғәт итеү этикет нормаларының тарихы. Яңғыҙлыҡ исемдәр, туғанлыҡ атамалары, профессия, вазифа; йәше һәм | Рәсми һәм рәсми булмаған телмәр ситуацияларында этикет формаларын һәм мөрәжәғәт итеү формаларын һаҡлау; таныш булмаған кешегә мөрәжәғәт итеүҙә хәҙерге мөрәжәғәт итеү формалары; милли телмәр этикеты нигеҙендә ятыусы аралашыуҙың этикет принциптарын һаҡлау; |

| | | |
|---|---|---|
| | енес яғынанмөрәжәғәт итеүҙәрҙе ҡулланыу үҙенсәлектәре. | башҡорт этикетының вербаль (телдән) һәм вербаль булмаған аралашыу манераһын һаҡлау |
| ТЕКСТ (5 сәғәт) | | |
| Текст һәм уның төп билдәләре. (5 с.) | Текст һәмунының төп билдәләре. Телмәрҙең функциональ-мәғәнәүи төрө: һүрәтләү, хикәйәләү, фекерләү; уларҙың үҙенсәлектәре. Һөйләмдәрҙе һәм текстың өлөштәрен бәйләү саралары: һүҙ формаһы, тамырҙаш һүҙҙәр, синонимдар, антонимдар, эйәлек алмаштары, һүҙҙәрҙең ҡабатланыуы. Тексты мәғлүмәти эшкәртеү: текстың ябай һәм ҡатмарлы планы | Текстың төп билдәләрен таныу; тексты композицион-мәғәнәүи өлөштәргә (абзацтар) бүлеү; һөйләмдәрҙең һәм текст бүлектәренең (һүҙ формаһы, тамырҙаш һүҙҙәр, синонимдар, антонимдар, эйәлек заты алмаштары, һүҙҙәр ҡабатланыуы) бәйләнеү сараларын таныу; алған белемдәрҙе үҙ текстарыңды (телдән һәм яҙма) төҙөүҙә ҡулланыу. Текстың төп билдәләре буйынса алған белемдәрҙе практикала ҡулланыу |
| ТЕЛДЕҢ ФУНКЦИОНАЛЬ ТӨРЛӨЛӨГӨ (4 сәғәт) | | |
| Телдең фукциональ төрлөлөгө (дөйөм күҙаллау) (4 с.) | Телдең фукциональ төрлөлөгөн дөйөм күҙаллау: (фәнни, рәсми эш ҡағыҙҙары стиле, публицистик), матур әҙәбиәт теле. | Телдең төрлө фукциональ төрҙәренә ҡараған текстарҙы таныу: ҡулланыу сфераһын билдәләү һәм телдең теге йәки был төрө менән тиңләштереү |
| ТЕЛ СИСТЕМАҺЫ (11 сәғәт) | | |
| Фонетика. Графика. Орфоэпия (2 с.) | Өн һәм хәреф. Алфавит (ҡабатлау). Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙең системаһы. Һуҙынҡы өндәрҙең дөрөҫ әйтелеше. Тартынҡылыларҙың дөрөҫ әйтелеше һәм яҙылышы. Өн һәм хәрефтәрҙең нисбәте. Һүҙгә фонетик анализ. Ижек. Ижек төрҙәре. Баҫым. Башҡорт һәм рус телдәрендә баҫым. Лингвистиканың бүлеге булараҡ орфоэпия | Һүҙҙә телмәр өндәренең мәғәнәүи айырмалыҡлы функцияһын аңлау; миҫалдар килтереү. Бирелгән характеристика буйынса телмәр өндәрен таныу; һүҙҙең өн составын билдәләү. Бирелгән билдә буйынса өндәрҙе классификациялау. Һаңғыраү һәм яңғырау, ҡалын һәм йомшаҡ өндәрҙе айырыу. Һүҙҙең өн һәм хәреф составын сағыштырыу. Һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлеү һәм һүҙҙәрҙе юлдан юлға дөрөҫ күсереү. |
| Орфография (2 с.) | Һүҙҙәрҙең һәм һүҙ формаларының дөрөҫ яҙылышы булараҡ орфография. | Үтелгән орфограммаларҙы таныу. Орфография тураһында белемдәрен практикала ҡулланыу. Һүҙҙә, һүҙҙең нигеҙендә морфеманы таныу, һүҙҙең тамырын билдәләү. |

| | | |
|---|---|---|
| Лингвистика-ның бүлеге булараҡ лексикология (4 с.) | Һүҙҙәрҙең лексик мәғәнәһен аңлатыу (тамырҙаш һүҙҙәр һайлау, синоним һәм антонимдар табыу); һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатыу (контекст буйынса, аңлатмалы һүҙлек ярҙамында).<br>Бер һәм күп мәғәнәле һүҙҙәр.<br>Тура һәм күсмә һүҙҙәрҙең мәғәнәләре (ҡабатлау).<br>Һүҙҙәрҙең тематик төркөмө. Синонимдар. Антонимдар. Омонимдар.<br>Төрлө төрҙәге лексик һүҙлектәр (аңлатмалы һүҙлек, синоним, антоним, омоним һүҙлектәр) һәм туған телдең һүҙлек байлығын үҙләштереүҙә уларҙың роле.<br>Һүҙгә лексик анализ | Төрлө ысулдар менән (тамырҙаш һүҙҙәр һайлау, синоним, антоним һүҙҙәр табыу; контекст буйынса һүҙҙең мәғәнәһен табыу, аңлатмалы һүҙлек ярҙамында) һүҙҙең лексик мәғәнәһен аңлатыу. Бер мәғәнәле һәм күп мәғәнәле һүҙҙәрҙе табыу, тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙе айырыу; Синоним, антоним, омонимдарҙы таныу; күп мәғәнәле һүҙҙәрҙе һәм омонимдарҙы айырыу; пароним һүҙҙәрҙе дөрөҫ ҡуллана белеү. Һүҙҙәрҙең тематик төркөмөн характерлау.<br>Һүҙҙәргә лексик анализ үткәреү (үтелгәндәр кимәлендә). Лексик һүҙлектәр (аңлатмалы һүҙлек, синоним, антоним, омонимдар) һүҙлектәре менән ҡуллана белеү |
| Морфемика һәм һүҙьяһалыш (3 с.) | Тел ғилеме бүлеге булараҡ морфемика.<br>Тел ғилеме бүлеге булараҡ морфемика.<br>Һүҙҙең иң бәләкәй киҫәге булараҡ<br>морфема. Морфема төрҙәре.<br>Һүҙҙең иң бәләкәй киҫәге булараҡ<br>морфема. Һүҙьяһалыш һәм һүҙҙең<br>формаһы үҙгәреүе. Һүҙҙең нигеҙе. Ялғау – форма барлыҡҡа килтереүсе морфема. Тамыр, аффикстар – морфеманың төрҙәре.<br>Һүҙҙәрҙең тамыр морфемаларҙан һәм<br>аффиксаль морфемаларҙан килеүе | Морфемика һәм һүҙьяһалыштың төп аңлатмаларын үҙләштереү.<br>Һүҙҙең иң бәләкәй киҫәге булараҡ морфеманы төшөнөү; морфеманың башҡа тел берәмектәренән айырылыуы; формаһәм һүҙьяһалыш процесында морфеманың роле. Морфеманы таныу һәм һүҙҙәрҙе морфемаға айырыу; һүҙҙең морфема составына характеристика биреү. Тамыр һүҙ, һүҙҙең нигеҙе (яһалма һүҙ) , төрлө ялғауҙар һүҙ составын тәшкил итеүен аңлау. Тамыр һәм нигеҙ һүҙҙәрҙе билдәләү. Һүҙ яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙарҙы айыра белеү. Ҡушма һәм парлы һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышын үҙләштереү |
| МОРФОЛОГИЯ. ОРФОГРАФИЯ (17 сәғәт) | | |
| Морфология. Орфография (4 с.) | Грамматика бүлеге булараҡ морфология.<br>Һүҙҙәрҙең грамматик мәғәнәһе.<br>Һүҙҙең лексик-грамматик | Һүҙҙең грамматик мәғәнәһе, уның лексик мәғәнәнән айырмалыҡ үҙенсәлектәрен анализлау һәм характерлау. |

| | | |
|---|---|---|
| | разряды булараҡ һүҙ төркөмдәре. Һүҙ төркөмдәрен классификациялау принцибы. Башҡорт телендә һүҙ төркөмдәренең системаһы. Үҙаллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәре. Яңғыҙлыҡ һәм ҡыҫҡартылған исемдәрҙе дөрөҫ яҙыу. | Исем, сифат, ҡылым һүҙ төркөмдәрен таныу. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен һәм уларҙың формаларын таныу; Һүҙ төркөмдәренә морфологик анализ үткәреү |
| Исем(4 с.) | Һүҙ төркөмө булараҡ исем. Исемдәргә морфологик анализ. Исемдең дөйөм грамматик мәғәнәһе, морфологик билдәләре һәм синтаксик функцияһы. Телмәрҙә исемдең роле | Исемдең дөйөм грамматик мәғәнәһен, морфологик билдәләрен һәм синтаксик функцияһын билдәләү һәм характерлау. Телмәрҙә исемдең ролен билдәләү. Исемдәрҙең лексик-грамматик төркөмдәрен билдәләү һәм характерлау. |
| Сифат (4 с.) | Сифаттарға морфологик анализ. Сифаттыңдөйөм грамматик мәғәнәһе, морфологик билдәләре һәм синтаксик функцияһы. Телмәрҙә сифаттың роле | Сифаттарға морфологик анализ. Сифаттарҙың дөйөм грамматик мәғәнәһе, морфологик билдәләре һәм синтаксик функцияһын характерлау. |
| Ҡылым (5 с.) | Һүҙ төркөмө булараҡ ҡылым. Ҡылымдың дөйөм грамматик мәғәнәһе, морфологик билдәләре һәм синтаксик функцияһы. Ҡылымдың һүҙбәйләнештәрҙә, һөйләмдәрҙә, телмәрҙә роле. Ҡылымдарҙың заман, зат һәм һан менән үҙгәреше. Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар. Тамыр һәм нигеҙ ҡылымдар. Ҡылым һөйкәлештәре | Ҡылымдың дөйөм грамматик мәғәнәһе, морфологик билдәләре һәм синтаксик функцияһын характерлау. Ҡылымдың һүҙбәйләнештәрҙә, һөйләмдәрҙә, телмәрҙә ролен аңлатыу. Ҡылымдарҙың заман, зат һәм һан менән үҙгәрешен билдәләү. Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдарҙы, тамыр һәм нигеҙ ҡылымдарҙы айыра белеү. Ҡылым һөйкәлештәрен анализлау. |
| СИНТАКСИС. ПУНКТУАЦИЯ (23 сәғәт) | | |
| Синтаксис һәм пунктуация. Һүҙбәйләнеш (4 с.) | Лингвистика бүлеге булараҡ синтаксис һәм тыныш билдәләре. Һүҙбәйләнеш. Синтаксис тураһында дөйөм төшөнсә. Тыныш билдәләре тураһында аңлатма. Тыныш билдәләре һәм уларҙың функцияһы. Һөйләм һәм һүҙбәйләнеш. Һүҙбәйләнеш һәм уның билдәләре. | Синтаксис берәмеге булараҡ һүҙбәйләнеш һәм һөйләмдәрҙе таныу. тыныш билдәләренең функцияһын билдәләү. Һөйләмдәрҙән һүҙбәйләнештәрҙе айырып алыу, һүҙбәйләнештәрҙә төп һүҙҙең морфологик билдәһе буйынса һүҙбәйләнештәрҙе таныу. Һүҙбәйләнештә һүҙҙәрҙе бәйләү |

| | | |
|---|---|---|
| | Һүҙбәйләнештә һүҙҙәрҙең бәйләнеү юлдары. Һүҙбәйләнешкә синтаксик анализ | сараларын билдәләү. Һүҙбәйләнештәргә синтаксик анализ үткәреү |
| Һөйләм (3 с.) | Хәбәр, һорау, өндәү һәм өндәү һөйләмдәрҙең мәғәнәүи һәм интонацион үҙенсәлектәре (ҡабатлау). Һөйләмдең баш киҫәктәре. Эйә менән хәбәр. Йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәр. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре: аныҡлаусы, тултырыусы, хәлдәр. Ябай ике составлы һөйләмдәргә синтаксик анализ | Әйтелеү маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәрен таныу. Хәбәр, һорау һәм өндәү һөйләмдәрҙе телмәр практикаһында ҡулланыу. Эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ ҡуйыу осрағы ҡағиҙәләрен ҡулланыу. Йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәрҙе айырыу. Эйәрсән киҫәктәрҙең төрҙәрен айырыу. Ябай һөйләмдәргә синтаксик анализ яһау |
| Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре: аныҡлаусы, тултырыусы, хәлдәр. Һөйләмдең тиң киҫәктәре (5 с.) | Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре, уларҙың төрҙәре һәм сағылдрыу ысулдары. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре: аныҡлаусы (тиң һәм тиң булмаған аныҡлаусының төрө булараҡ өҫтәлмәлек), тултырыусылар (тура һәм ситләтелгән), хәл (рәүеш, күләм-дәрәжә, ваҡыт, урын, сәбәп, маҡсат, шарт, кире). Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәрен сағылдырыу ысулдары. Тиң киҫәкле һөйләмдәр, уларҙың интонацион һәм пунктуацион үҙенсәлектәре. Тиң киҫәкле һөйләмдәр. Һөйләмдәрҙә тиң киҫәктәрҙең булыу шарттары. | Һөйләмдәрҙеңһәм эйәрсән киҫәктәрен билдәләү. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәренең сағылыу ысулдарын билдәләү. Тиң киҫәктәрҙең төрлө типтағы бәйләнешен (теркәүестәр, теркәүесеһеҙ, йәғни интонация ярҙамында, йыйыу, бүлеү, ҡаршы-ҡуйыу, аныҡлау, сәбәп теркәүестәре менән бәйләнеү, Грамматик нормаларға яраҡлы тиң эйәләр булғанда хәбәр формаһын һайлау. Тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе анализлау һәм характерлау. Төрлө стиль һәм жанрҙағы текстарҙа тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе ҡулланыу үҙенсәлектәрен күҙәтеү |
| Өндәш һүҙ менән һөйләмдәр. Интонация үҙенсәлектәре (3 с.) | Өндәш һүҙҙәр. Өндәш һүҙҙәр, уларҙың функцияһы. Өндәш һүҙ менән һөйләмдәр һәм интонация үҙенсәлектәре Өндәш һүҙ менән һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре | Өндәш һүҙҙәрҙең төп функцияларын аңлау. Өндәш һүҙҙәр менән һөйләмдәрҙе таныу һәм дөрөҫ интонация менән әйтеү. Аралашыуҙың сфераһына һәм ситуацияға ҡарап, телмәрҙә өндәш һүҙҙәр менән һөйләмдәр ҡулланыу. |
| Ҡушма һөйләм (5 с.) | Ҡушма һөйләм тураһында төшөнсә. Ҡушма һөйләмдәрҙә ябай һөйләмдәрҙең бәйләнеү | Ябай һәм ҡушма һөйләмдәрҙе сағыштырыу. Ҡушма һөйләмдәрҙең ябай |

| | | |
|---|---|---|
| | юлдары. Ҡушма һөйләмгә синтаксик анализ | һөйләмдәрҙән айырмалы яҡтарын билдәләү. Ҡушма һөйләмдәрҙе анализлау. Ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләрен ҡулланышын үҙләштереү. Ҡушма һөйләмгә синтаксик анализ яһау |
| Тура телмәр (3 с.) | Яҙыуҙа сит кешенең телмәрен еткереү сараһы булараҡ тура телмәр.<br>Тура телмәрле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең ҡуйылышы | Тура телмәрле һөйләмдәрҙе анализлау. Тура телмәрле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләрен ҡуйылыщы тураһында үҙаллы һығымта эшләү |
| Уҡыусыларҙың белемдәрен тикшереү һәм үтелгәндәрҙе ҡабатлау (2 с.) | | Үтелгән материалдарҙы ҡабатлау, контроль эш яҙҙырыу, алынған белемдәрен коррекциялау буйынса эштәр башҡарыу. |

**6 КЛАСС (68 СӘҒӘТ)**

| **Тематик блок, тема** | **Төп йөкмәтке** | **Уҡыусыларэшмәкәрлегенең төп төрҙәре** |
|---|---|---|
| ТЕЛ ТУРАҺЫНДА ДӨЙӨМ ТӨШӨНСӘ (1 сәғәт) | | |
| Башҡорт теле – Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле.<br>Әҙәби тел тураһында аңлатма. (1 с.) | Башҡорт теле - Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле.<br>Әҙәби тел тураһында аңлатма | Башҡорт теле - Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булараҡ уның функцияларын билдәләү. Әҙәби тел тураһында аңлатма биреү. |
| ТЕЛ ҺӘМ ТЕЛМӘР (2 сәғәт) | | |
| Телмәр төрҙәре.<br>Монолог һәм диалог. Уларҙың төрлөлөгө (2 с.) | Монолог-һүрәтләү, монолог хикәйәләү, монолог-фекер йөрөтөү; лингвистик темаға белдермә.<br>Диалог төрҙәре: эшмәкәрлеккә өндәү, фекер алышыу | Тормошта күҙәтеүҙәрҙән, тыңланған һәм уҡылған фәнни-популяр әҙәбиәттән (монолог-һүрәтләү, монолог хикәйәләү, монолог-фекер йөрөтөү) телдән монологик фекер әйтеүҙе төҙөү; лингвистик темаға белдермә менән сығыш яһау. |
| ТЕЛМӘР МӘҘӘНИӘТЕ (6 СӘҒӘТ) | | |
| Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең төп орфоэпик нормалары (ҡабатлау).<br>Хәҙерге башҡорт | Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең төп орфоэпик нормалары (ҡабатлау).<br>Хәҙерге башҡорт теленең төп грамматик нормалары.<br>Һүҙлектәрҙә һәм белешмәләрҙә | Телмәр стиле (ҡайһы бер миҫалдарҙа) башҡорт телендә әйтелеш буйынса айырмалыҡтарҙы билдәләү; әйтелештә норматив варианттарҙы һайлау өсөн |

| | | |
|---|---|---|
| теленең төп грамматик нормалары (2 с.) | грамматик нормаларҙың варианттарын сағылдырыу. Башҡорт һәм башҡа телдәрҙәге исем, фамилияларҙы үҙгәртеү; географик объекттарҙың атамалары. Телмәрҙә типик грамматик хаталар. Исем, сағыштырыу формаһында сифаттарҙы, ҡылым, алмаш, һандарҙы ҡулланыу нормалары. Исем, уртаҡ, сифат, хәл ҡылымдарҙы, рәүеш һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен ҡулланыу нормалары | орфоэпик, шул иҫәптән мультимедийный һүҙлектәрҙе ҡулланыу; Яҙыуҙа (өйрәнелгән кимәлдә) орфография һәм пунктуация ҡағиҙәләрен ҡулланыу; орфография буйынса һүҙлектәр һәм пунктуация буйынса белешиәләр ҡулланыу.Исем, сифат, ҡылым, алмаш, һан, рәүеш, теркәүес, исем ҡылым, сифат ҡылым, уртаҡ ҡылым, хәл ҡылымдарҙы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен телмәрҙә ҡулланыу |
| Хәҙерге башҡорт теленең төп лексик нормалары (2 с.) | Хәҙерге башҡорт теленең төп лексик нормалары. Килеп сығышы яғынан һүҙҙәрҙе айырыу: төп башҡорт һәм үҙләштерелгән һүҙҙәр; актив һәм пассив һүҙлек запасына инеү яғынан айырыу: неологизмдар, иҫкергән һүҙҙәр (историзмдар һәм архаизмдар); ҡулланышы яғынан һүҙҙәрҙе айырыу: дөйөм ҡулланылышлы һүҙҙәр һәм ҡулланыу яғынан сикләнгән һүҙҙәр (диалект һүҙҙәре, терминдар, профессионализмдар, жаргон һүҙҙәр); һүҙҙең стилистик биҙәлешен билдәләү. Текста фразеологизмдар, афоризмдар, ҡанатлы һүҙҙәрҙе айырыу | Һүҙҙәрҙе килеп сығышы яғынан анализлау: төп башҡорт һүҙҙәре һәм үҙләштерелгән һүҙҙәр; актив һәм пассив һүҙлек запасына ҡарауҙары менән айырыу: неологизмдар, иҫкергән һүҙҙәр (историзмдар һәм архаизмдар); һүҙҙәре ҡулланыу сфераһы яғынан айырыу: дөйөм ҡулланалашла һүҙҙәр һәм ҡулланышы яғынан сикләнгән һүҙҙәр ( диалектизмдар, терминдар, профессиональ һүҙҙәр, жаргондар); һүҙҙең стилистик төҫмәрленешен билдәләү; Текста фразеологизмдарҙы таныу, уларҙың мәғәнәләрен билдәләй белеү; фразеологизмдарҙың ҡулланыу ситуацияһын характерлау; Ҡанатлы һүҙҙәр һәм афоризмдарҙы билдәләү; |
| Телмәр этикеты (2 с.) | Телмәр этикетының милли үҙенсәлектәре. Милли аралашыу этикетының нигеҙендә булыусы аралашыу этикет принциптары. Аралашыуҙың башы һәм тамамлау, маҡтау һәм комплимент, рәхмәт белдереү, ҡайғы уртаҡлашыу, тынысландырыуҙың этикет формалары | Аралашыуҙа башҡорт этикетының вербаль һәм вербаль булмаған манераһын һаҡлау; милли башҡорт телмәр этикеты нигеҙендә ятҡан аралашыу этикет принциптарын һаҡлау; арлашыуҙы башлау һәм тамамлау, маҡтау һәм комплимент әйтеү, рәхмәт белдереү, хуплау, тынысландырыу һ.б. ҡулланыу |

| | | |
|---|---|---|
| ТЕКСТ (4 сәғәт) | | |
